ISSN 0869-5008

# АМАНАТ

2010
Май






# ИКЕ ЕҢЕҮ ЯУЛАҒАН ЯУГИР

Фәтҡулла Әхмәҙулла улы Түләбаевҡа танк эсендә ике һуғышты үтергә тура килә. Ейәнсура районының Үрнәк ауылында тыуып үҫкән егетте 1942 йылда 18 йәше тулыр-тулмаҫтан һуғышҡа алып китәләр. Уға тиклем Фәтҡулла ағай тракторсылар курсында уҡып сыҡҡан була, шул уны туранан-тура танк водителе итеп ултыртыуға сәбәп була ла инде. Смоленск янында һуғышҡа инеп, бер нисә тапҡыр яраланып һәм контузия алып, тағы ла сафҡа баҫып, дошманды ҡыуып, ул Германияға барып инә.

Немец фашистарына ҡаршы һуғышты ослап ҡуйғас, Японияға ҡаршы яу асыла. Бында ла Фәтҡулла ағайһыҙ барып сыҡмай. Алыҫ Көнсығышта самурайҙарҙы ҡыйратып, һуғышты тамамлағас та Фәтҡулла Түләбаевҡа тиҙ генә ҡайтып китергә яҙмай әле – ул башҡорт халыҡ йырында йырланған Порт-Артур ҡалаһы янында хеҙмәткә ҡалдырыла. Шулай итеп, һигеҙ йыл әрмелә йөрөп, 1950 йылда ғына тыуған яҡтарына ҡайтырға яҙа яугирға.

Ейәнсура районы үҙәге Иҫәнғол башҡорт гимназияһында уҡыусылар менән осрашыуҙа Фәтҡулла ағай үҙенең һуғыш йылдары, һуғыштан һуңғы осор ауырлыҡтары тураһында һөйләне.

– Беҙ ил өҫтөнә төшкән ауырлыҡтарҙы иңебеҙгә күтәреп, ҡул көсө менән еңеп сыға алдыҡ. Ә һеҙгә матур итеп уҡып, белемегеҙҙе төп көс итеп ҡулланыр өсөн барлыҡ шарттар ҙа тыуҙырылған, – тип фатиха бирҙе балаларға ветеран. – Әле һеҙ белем алған мәктәптәрҙе беҙ хыялда ла күҙ алдына килтерә алмай инек. Әммә Еңеүҙән һуң тормош барыбер яҡшыраҡ буласағына ышаныс ҙур ине, хәҙер шуны үҙ күҙҙәрем менән күрергә яҙҙы...



**ҺҮРӘТТӘ: Фәтҡулла олатай Түләбаев Ейәнсура башҡорт гимназияһы уҡыусылары менән.**

# “КИЛӘСӘК БЕҘҘӘН БАШЛАНА”

Шундай девиз аҫтында Өфөнөң Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында I Өфө ҡалаһы балалар ҡоролтайы үтте. Ул июнь айында Өфөлә үтәсәк III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына арналды. Унда ҡала мәктәп, гимназия һәм лицейҙарҙан бөтәһе 156 делегат ҡатнашты. Башҡаланың беренсе балалар ҡоролтайына килгән абруйлы ҡунаҡтар араһында делегаттарҙы һәм ҡунаҡтарҙы тәбрикләп, Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов: “Бөгөн мөһим тарихи ваҡиға үтә. Беҙҙең балалар беҙҙең менән бергә республика алдында торған көнүҙәк мәсьәләләрҙе тикшерә, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләй”, – тине.



Уҡыусылар Ҡоролтайға етди әҙерләнгәйне. Уларҙың ил, тел, милләт, белем биреү тураһындағы төплө, тәрән фекер-тәҡдимдәрен ишетеү бик тулҡынландырғыс булды. Доклад менән сығыш яһаған 12 делегаттың барыбыҙҙы ла борсоған проблемаларҙы күтәреп сығырға йөрьәт итеүе, ысынлап та, үҙе бер батырлыҡ! Мәҫәлән, Рәми Ғарипов исемендәге I Башҡорт республика гимназия-интернатының уҡыусыһы Фаягөл Юнисова республикала ауыл балаларының һәләттәрен үҫтереүгә йүнәлтелгән махсус программа ҡабул ителергә тейеш, тип иҫәпләй. Уның фекеренсә, ауыл мәктәптәрендә лә бит етди фекер йөрөткән, ҡыйыу ҡарашлы балалар күп, тик мөмкинлектәре генә сикләнгән.

20-се ҡала башҡорт гимназияһынан Тимур Вәхитовтың сығышы “Ҡала башҡорт йәштәре өсөн 15 ҡағиҙә, йәки ата-әсәләргә мөрәжәғәт” тип аталды.



– Мин үҙем ҡалала тыуып үҫтем. Ҡала шарттарында бала тәрбиәлгән ата-әсәләр мин тәҡдим иткән 15 ҡағиҙәне күҙ уңында тоторға бурыслы. Беренсеһе, әлбиттә, тел. Һәр бала үҙ телендә яҡшы һөйләшергә, шәжәрәһен белергә тейеш, – тине ул. Шулай уҡ физик тәрбиә биреү һәм ижади һәләттәрҙе үҫтереүҙең дә мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды Тимур.

Башҡа делегаттарҙың да сығышы бик йөкмәткеле булды, көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәреп кенә ҡалманылар, ә уларҙы хәл итеү юлдарын да асып һалырға тырыштылар.

Сығыштар һәм улар буйынса фекер алышҡандан һуң III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына мөрәжәғәт һәм резолюция ҡабул ителде. Резолюция башҡорт халҡының тарихын һәм мәҙәни традицияларын өйрәнеү, ижтимағи тормошо буйынса эштәрҙә әүҙем ҡатнашыу, мәктәптәрҙә түңәрәктәр селтәрен киңәйтеү, башҡорт мәктәптәре араһында даими мәҙәни бәйләнеш булдырыу, ваҡытлы матбуғат баҫмаларына яҙылыу һәм таратыу буйынса эштәрҙе әүҙемләштереү, башҡорт милләтенән булған уҡыусыларға юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүҙе маҡсатлы квота ярҙамында тормошҡа ашырыуҙы юллау, патриотик тойғо, илһөйәрлек һәм лидерлыҡ сифаттарын тәрбиәләү маҡсатында “Лидерҙар мәктәбе” ойоштороу, башҡорт теленән берҙәм төбәк имтиханын юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингәндә рус теле менән тигеҙ файҙаланыу хоҡуғын юллау кеүек тәҡдимдәрҙе үҙ эсенә алды.

**Ф. НУРИЕВА.**



## Ватан өсөн үлгән улар

Яҙҙың матур көндәрендә,
Фашистарҙы яуҙа ҡырып,
Илем еңеү яуланы.
Еңеү килгән беҙҙең илгә
Ҡайтты улдар тыуған ергә,
Тынды һуғыш яланы.
Фашистарҙы ҡырған улар –
Ватан өсөн үлгән улар.
Халҡымдың уландары.

**Гүзәлиә АЛТЫНБАЕВА.**
**Бөрйән районының Байназар ауылы.**

1945 2010

## Һалдат

Ул үлемдән ҡурҡмаған,
Фашистарҙы туҡмаған.
Бөйөк Ватанын һөйгән,
Еңеү байрағын элгән.

**Алһыу МОСТАФИНА.**
**Әбйәлил районының**
**Ҡаҙмаш ауылы.**

## Олатайым – ветеран

Олатайым – ветеран,
Ул һуғышта ҡатнашҡан.
Ҡышҡы ҡаты һыуыҡта ла
Ул окоптарҙа ятҡан.

Иле тыныс йәшәһен тип
Ул дошмандарға атҡан.
Фашистарҙың танкыларын
Бер-бер артлы ҡыйратҡан.

Еңеү көндәре етте,
Көслө алыштар бөттө.
Болондарҙа алһыуланып
Матур сәскәләр үҫте.

Сафта атлай олатай,
Миҙалдарын сыңлатып.
Яуҙа ҡалған дуҫтарын
Иҫкә ала тын ҡалып.

**Земфира ИРҒӘЛИНА,**
**Белорет ҡалаһының**
**21-се урта мәктәбе уҡыусыһы.**




## Ленинград һаҡсыһы

**Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Ибраһимов Әмир Ғизметдин улына.**

Ленинград блокадаһын ул
Баштан-аяҡ үткәргән.
Яраланып ҡан да түккән,
Аслығын да күтәргән.

Булған иң алғы һыҙыҡта –
Ут ямғыры аҫтында.
Аптырарһың, нисек иҫән
Ҡалған шундай янғында.

“Ҡыйыуҙарҙан пуля ҡурҡа,
Ҡыйыуҙы штык та алмай”, –
Тигән һүҙҙәр һинең хаҡта
Булалыр, Әмир олатай!

Ниндәй эштәр башҡарһаң да,
Ҡалманың һис тә баҙап.
“Йөҙ йәш” тигән кәлгәне лә
Алып, флаг ҡуй ҡаҙап.

**Зәки СӨЛӘЙМӘНОВ.**
**Бөрйән районының Аҫҡар ауылы.**

## Еңеү килмәгән еңел

Килгән беҙгә һәләкәт –
Рәсәйебеҙгә ҡул һуҙған
Фашист тигән кәбәхәт.

Илен дошмандан һаҡларға
Халҡым яуға ҡуҙғалған.
Йәше-ҡарты – барыһы ла
Ҡулына ҡорал алған.

Дүрт йыл дауам иткән һуғыш,
Алыш өҫтөнә алыш.
Иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡан ҡойош,
Ғәрипләнеү, үлтереш…

Ур-ра! Беҙҙекеләр еңгән!
Эй, Еңеү! Бөйөк еңеү!
Күп юғалтыуҙар, етемдәр…
Еңеү килмәгән еңел…

Эй, Хоҙай, булмаһын һуғыш!
Аяҙ булһын күгебеҙ.
Булмаһын яуҙар һис ҡасан,
Тыныс булһын илебеҙ!

**Фәйгөл ҠУНАҠБАЕВА,**
**“Аманат”тың йәш хәбәрсеһе.**
**Күмертау ҡалаһы.**

## Картатайым

Малайҙар һуғыш уйнаһа,
Йән-тәнем китә өшөп –
Һуғыш афәттәрен беләм
Картатайҙан ишетеп.

Картатайым йәп-йәш көйө
Изге яуҙа ҡатнашҡан.
Тыуған илебеҙҙе һаклап,
Дошман менән алышҡан.

Алтмыш биш йыл буйы һыҙлай
Карт һалдат яралары.
Үткәндәрҙе хәтерләтә
Ордены-миҙалдары.

Малайҙар һуғыш уйнайҙар.
Уйнаһын, ти, картатай,
Ил тыныслығын һаҡларҙар,
Үҫкәс, яугир һалдаттай.

**Ләйсән ИШЕМҒОЛОВА.**
**Хәйбулла районының**
**Акъяр ауылы.**

# Етәксе булып ҡараныҡ

Бер көн тәрбиәсебеҙ Дилара Ҡәйүм ҡыҙы беҙҙе үҙ янына саҡырып алды ла: “Кем булырға теләйһегеҙ һәм ни өсөн?” – тигән һорау бирҙе (Үҙе мут ҡына йылмая). Беҙҙең, 10-сы синыф уҡыусыларының, һәр беребеҙҙең үҙ хыялы, үҙ теләге. Барыбыҙ ҙа оҡшаған һөнәрҙәребеҙҙе яҙып, уға тапшырҙыҡ.

Бер аҙнанан Дилара апай беҙҙе кисәнең программаһы менән таныштырҙы.

Күпселек уҡыусыларҙың етәксе булғыһы килгән. Бына беҙҙең теләктәр тормошҡа ашты: 17 уҡыусы, 17 ойошмаға барып, ярты көн етәксе булып ултырҙыҡ, уларҙың эштәре менән таныштыҡ. Ошо етәкселәр тураһында, уларҙың һөнәре хаҡында материал туплап, йомғаҡлау кисәһендә сығыш яһаныҡ. Әйткәндәй, был кисәгә етәкселәр үҙҙәре лә саҡырылды.



Дилара Ҡәйүм ҡыҙы был кисә тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас та, мин район йәштәр бүлеге комитеты рәйесе Артур Борхан улы Ғайсаров янына барырға ҡарар иттем. Сөнки йәштәр – илебеҙ, милләтебеҙ киләсәге.

Етди, яуаплы, аралашыусан кеше ул Артур Борхан улы. Уның миҫалында етәксе эше бик ҡатмарлы булыуын күрҙем.

Мәҡәләмде америка психологтарының бәхет формулаһы менән тамамлап ҡуям: “Бәхетле булыу өсөн кеше үҙ эшен, үҙ урынын табырға тейеш”. Бына шулай, үҙ эштәренең оҫталары булған алдынғы ҡарашлы етәкселәр менән яҡындан танышыу бик оҡшаны беҙгә.

**Илүзә ҠУНАҠБАЕВА,**
**Ейәнсура башҡорт**
**гимназия-интернаты уҡыусыһы.**
**ҺҮРӘТТӘ: Артур Борхан улы**
**Ғайсаров менән.**

# Күңел асҡысы таба белә

Уҡытыусы һөнәре – ул иң ауыр һәм яуаплы һөнәрҙәрҙең береһе. Балаларҙы бөтә күңеле менән яратҡан, уларҙы аңлай белгән кеше генә уҡытыусы һөнәрен һайлай торғандыр.

Беҙҙең мәктәптә лә һәр уҡытыусы үҙ эшен яратып башҡара. Шуларҙың береһе – урыҫ теле һәм әҙәбиәтенән белем биреүсе, синыф етәксеһе Фирүзә Дәүләтша ҡыҙы Абдуллина. Фирүзә Дәүләтша ҡыҙы үҙенең ябайлығы, алсаҡлығы, тәрән аҡылы менән барыбыҙҙы ла хайран ҡалдыра. Уның дәрестәрен бөтә балалар ҙа көтөп ала. Сөнки уҡытыусымдың һәр бер дәресенән яҡтылыҡ, изгелек бөркөлә. Фирүзә Дәүләтша ҡыҙы бер уҡыусыға ла ҡаты бәрелмәй. Ул ихлас, йомшаҡ күңелле, һәр беребеҙгә күңел асҡысы таба белә. Бәлки, шуғалыр ҙа, тырышып уҡыйһы ғына килеп тора.

Фирүзә Дәүләтша ҡыҙы өйөндә лә хәстәрлекле әсә, уңған хужабикә. Ҡул эшенә лә оҫта: шәл, кофта, биҙәкле ойоҡ-бейәләйҙәр бәйләй, күҙ ҡамаштырырлыҡ итеп сигеү сигә.

Яратҡан уҡытыусыма һаулыҡ һәм яуаплы эшендә ҙур уңыштарға өлгәшеүен теләйем.

**Гөлназ ХӘСӘНОВА,**
**Ҡырмыҫҡалы районының**
**Иҫке Бәпес мәктәбе уҡыусыһы.**

# Мәрхәмәтдин олатайым



Минең олатайым – Бөйөк Ватан һуғышы ветераны һәм инвалиды. Уның исеме Мәрхәмәтдин.

1919 йылдың 24 декабрендә ғаиләлә беренсе бала булып донъяға килгән. Ауылдағы ете йыллыҡ мәктәптә тамамлағас, Карелия сиктәрен нығытыу өсөн шунда төҙөлөшкә китә. 1938 йылда Ҡарабашҡа әйләнеп ҡайта һәм һарыҡ фермаһында эшләй башлай.

Күп тә үтмәй, Аяткаға торф сығарырға китә. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, торф сығарыусылар ҙа өйҙәренә таралыша. Йәйәүләп 21 көн тигәндә олатай Ҡарабашҡа ҡайтып етә.

1942 йылдың 1 февралендә ул фронтҡа оҙатыла. Күп кенә бәрелештәрҙә ҡатнаша һәм “Сталинградты обороналаған өсөн” миҙалы менән бүләкләнә.

Украина, Польша, Белоруссия, Чехословакия ерҙәрен азат итеүҙә ҡатнаша һәм 1946 йылда тыуған ауылына ҡайтып төшә.

Һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа илде аяҡҡа баҫтырыуҙа ҡатнаша. Башта Киров исемендәге колхозда бригадир, һуңынан Тәләкәй МТС-ында иҫәпсе булып эшләй.

Олатайым былтыр 90 йәшлек юбилейын билдәләне.

**Зөһрә ГӘРӘЕВА,**
**Илеш районының Ҡарабаш мәктәбе уҡыусыһы.**
**ҺҮРӘТТӘ: Мәрхәмәтдин олатайым менән.**

# Һәр һанын көтөп алам

“Аманат” журналы ҡыҙыҡлы, файҙалы мәғлүмәттәргә бай. Уны бөтәһе лә яратып уҡыйҙыр, тип уйлайым. Үҙем һәр һанын көтөп алам. “Төйәгем тарихы” рубрикаһынан республикабыҙҙың төрлө ауылдарының тарихын өйрәнәм, “Аманат коллекцияһы” махсус сығарылышында автомобилдәр хаҡында уҡыу, йәнә сканвордтар сисеү оҡшай. Яратҡан баҫмам һәр саҡ шулай уҡымлы булып ҡалһын ине.

**Динар ҒӘБИҘУЛЛИН,**
**2-се синыф уҡыусыһы.**
**Бөрйән районы,**
**Аҫҡар ауылы.**

## “Аманат” ваҡыты менән йәшәгеҙ!

Хөрмәтле уҡыусылар! Һеҙ "Аманат" ваҡыты буйынса йәшәргә теләйһегеҙме? Беҙ һеҙгә шундай мөмкинлек бирергә булдыҡ.

Һеҙҙең бурыс – май, июнь, июль һәм август айҙарында сығасаҡ һандарҙан ҡырҡып алып, ошондай сәғәттең сирек өлөшсәләренән тулы сәғәтте йыйып, бергә йәбештереп, "Аманат"тың сувенир сәғәте һүрәтен беҙгә ебәреү. Артына, әлбиттә, үҙегеҙ тураһында мәғлүмәттәрҙе тултырағыҙ.

Беҙҙең бурыс – редакцияға килгән һүрәттәр араһында (уның өсөн дүрт ай дауамында берәр һүрәт киҫәген йыйып барыу, аҙаҡ беҙгә ебәреү кеүек "ауыр" эш башҡарырға кәрәк әле) лотерея үткәреп, һүрәттәге сәғәттең ысынын еңеүсегә илтеп тапшырыу.

Уйындың йомғағы сентябрҙә иғлан ителәсәк.



**“Аманат”ҡа яҙылып ҡалырға онотмағыҙ!**
**Ярты йылға яҙылыу хаҡы 133 һум 26 тин генә.**

# КИЛӘСӘКТЕ УЙЛАП,

**Ейәнсура районының Яңыбай ауылы район үҙәге Иҫәнғолдан 120 саҡырым алыҫлыҡта ята. Өфөнән иртәнге 6-нан юлға сығып, төшкә ҡарай ғына барып еткәс, уҡытыусыларҙан: “Беҙ күберәген йомош-фәлән менән Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ ҡалаһына йөрөйбөҙ. Эй, үҙебеҙҙең элекке башҡорт ерҙәре әле, тибеҙ ҙә, гел шунда юл тотабыҙ. Яҡын бит, 40 саҡырым ғына. Өфөлә уҡып йөрөүсе йәштәр ҙә Ҡыуандыҡ аша ҡайтыуҙы хуп күрә”, – тигәндә ишеттек. Редакцияның тимер аты – “Волга”һын ошо тиклем ергә ҡыуаллауҙың төп сәбәбе: “Яҙыл да, бүләк от!” конкурсында ҡатнашып, двд-плеер отҡан Рүлә Бармаҡоваға алдан вәғәҙә ителгән призды тапшырыу ине.**



Ауылдың барлыҡҡа килеү тарихына күҙ һалһаҡ, былай тиелә. Яңыбай, Ҡолтай, Ҡужанаҡ исемле егеттәр яңы йәшәү урыны эҙләп был яҡтарға килеп сыға. Бейек тауға менәләр ҙә тирә-яҡҡа ҡарайҙар. Тәбиғәттең матурлығы хайран ҡалдыра уларҙы. Ошо яҡтарҙа төпләнергә булып, шыбаға тотошалар. Шыбағаның башы – Ҡужанаҡҡа, урта өлөшө – Ҡолтайға, ә аҫҡы яғы Яңыбайға тура килә.

Мәктәп, башланғыс мәктәп булараҡ, 1920 йылда асыла. 1940 йылда ете йыллыҡҡа әйләнһә, 1975 йылда урта мәктәп итеп үҙгәртелә. 1999 йылда яңы төҙөлгән бинаға күсә, уны асыуҙа Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов та ҡатнаша.

Бөгөн был белем усағы районда алдынғылар иҫәбендә. Өлгәш 100 процент булһа, белем сифаты – 60 процент.

– Йылдың-йылы район кимәлендә генә түгел, республика буйынса үткән олимпиада, конкурстарҙа ҡатнашып, яҡшы күрһәткестәргә ирешәбеҙ, призлы урындарға лайыҡ булабыҙ. Мәҫәлән, 8-се синыф уҡыусыһы Фәнил Ҡарасурин, “Минең ғаиләм – минең байлығым” район, “Мин – йәш” республика һәм “Аҡмулла вариҫтары” төбәк-ара конкурстарында ҡатнашып, беренсе урынға лайыҡ булды.

Ижади ҡарашлы, заманса фекер йөрөткән тырыш уҡытыусылар коллективы менән дә хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ. Уҡыусылар төплө белем алһын өсөн улар көсөн дә, ваҡытын да йәлләмәй. Район күләмендә үткән “Йыл уҡытыусыһы” бәйгеһендә лә әүҙем ҡатнашалар. Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Ғайса Ишмөхәмәтов “Йыл уҡытыусыһы – 2005” республика конкурсында гран-при яулаһа, физика һәм математика уҡытыусыһы Миңзәлиә Ҡансурина, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Лилиә Ҡотошова “Йыл уҡытыусыһы” район конкурсында призер булды, – тип һөйләй директорҙың уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Фәймә Әхмәтсәғит ҡыҙы Ишмөхәмәтова.

– Башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын яҡшы белеү менән бер рәттән беҙҙең уҡыусылар иҫ киткес эшһөйәр, ярҙамсыл да. Йыл һайын мәктәп яны участкаһында бер мең төп кәбеҫтә, ун бишәр түтәл кишер, һуған һәм ҡыяр үҫтерәләр. “Апай, ҡасан һыу һибергә, сүп утарға киләйек?” – тип үҙҙәре үк алдан белешеп торалар. Шундай уңған уҡыусыларыбыҙ булғас, мул уңыш алыуы ла ҡыйын түгел. Артып ҡалған йәшелсәне һатып, бер аҙ килем дә алабыҙ, был аҡса “Көҙгө бал”, яңы йыл кеүек байрамдарҙы уҙғарғанда ярап ҡала.

Шулай уҡ оло йәштәге инәй, олатайҙарға ла шефлыҡ итәбеҙ. Һуғышта һәләк булыусы яугирҙарға ҡуйылған обелисктың тирә-яғын ҡарап, тәрбиәләү ҙә беҙҙең уҡыусылар өҫтөндә, – ти директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Гөлзифа Бохарбай ҡыҙы Байбулатова.

Рүлә Бармаҡоваға затлы бүләкте тапшырғандан һуң, томрап торған күҙле, алсаҡ йөҙлө был һылыуҙың үҙе һәм синыфы менән яҡындан таныштыҡ. Рүлә – бар яҡлап та өлгөлө ҡыҙ. Бөтә фәндәрҙән дә тик “бишле”гә өлгәшеүҙән

# ТАМЫРҘАРҘЫ ЮЛЛАП...

тыш, йыр-бейеүгә лә оҫта. Район күләмендә уҙған төрлө бәйгеләрҙә ҡатнашып, әллә күпме маҡтау ҡағыҙына лайыҡ булған. Мәҫәлән, быйыл география, биология буйынса район олимпиадаһында – беренсе, рәсем буйынса икенсе урынға лайыҡ булған. Синыфташтары Нәзифә Ҡусҡарбәкова, Луиза Хужәхмәтова, Вилиә һәм Йәмилә Ҡансуриналар менән бергәләп "Хыял" ансамблендә лә шөғөлләнә.

– "Яңыбай һылыуҙары", "Кәкүк сәйе", "Сәскәләр", "Дуҫлыҡ" тигән бейеүҙәр башҡарабыҙ. Уларҙы беҙгә Гөлмирә Нуретдин ҡыҙы Байбулдина өйрәтте,– тине Рулә.

– Журналды йыл һайын алдырып барам. "Мәңгелек сер", "Айһылыу", "Тәбиғәткә – асыҡ тәҙрә" кеүек рубрикаларҙы яратып уҡыйым. "Яҙыл да, бүләк от!" конкурсын гелән күҙәтеп барһам да, бер ҡасан да купон тултырып ебәргәнем юҡ ине. Былтыр, тәүәкәлләп, ебәрҙем һәм көтмәгәндә бүләк отоу бәхетенә ирештем".

Руләнең бәйләргә, йомшаҡ уйынсыҡтар эшләргә яратыуын ишетеп, әллә был ҡыҙҙың ҡулынан килмәгән эш юҡ икән, тип эстән генә һоҡланып та ҡуйҙым. Синыф етәксеһе Ғайса Ишмөхәмәтов Руләнең ҡул эштәрен дә килтереп күрһәткәс, һоҡланыуымдың сиге булманы. Былтыр район күләмендә йомшаҡ уйынсыҡтар конкурсында Рулә үҙе яһаған йомшаҡ ҡуяны менән юҡҡа ғына беренсе урын яуламаған икән.

Етенсе синыфта бөтәһе 20 уҡыусы белем ала. Шуларҙың дүртеһе тик "бишле"гә өлгәшһә, алтыһы – ударник.

Был синыф мәктәптәге иң шәп синыфтарҙан





һанала. Бер конкурс, ярыштан да ситтә ҡалмайҙар, гел еңеү яулайҙар. Апрель айында ғына "һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсы үтте. Унда Нәзифә менән Вилиәгә – беренсе, ә Руләгә икенсе урын бирелде. Илнур Йәрмәков, "Йәш умартасы" республика конкурсында ҡатнашып, дүртенсе урынға лайыҡ булды. Ҡыҙҙарҙың ҡул эштәрен һәм һүрәттәрен "Тамыр" студияһының "Семәр" тапшырыуында күрһәтеү ҙә күңелдәрен үҫтереп ебәрҙе. Һеҙҙең, "Аманат" журналы хеҙмәткәрҙәренең дә, мәктәпкә килеп Руләгә бүләк тапшырыуы ла балалар күңелендә матур бер иҫтәлек булып ҡаласаҡ, – тине Ғайса Харис улы.

...Башҡорт рухлы, ипле, тәрбиәле был ҡыҙҙар һәм малайҙарҙы беҙ ҙә әле бик оҙаҡ һағынасаҡбыҙ, һәр саҡ иҫкә төшөрәсәкбеҙ. Һорауҙарға матур итеп яуап биреүҙәре, журналды алдырып уҡып барыуҙары, тәҡдимтеләктәре – барыһы ла оҡшаны, тик ыңғай хистойғолар ҡалдырҙы. Тау менән тау ғына осрашмай, кеше менән кеше осраша тиҙәрме әле? Шулай булғас, киләсәктә күҙгә-күҙ ҡарап аралашыуҙар, осрашыуҙар булыр әле.

**Нурия ФАЗЛЫЕВА.**

**ҺҮРӘТТӘРҘӘ: "Аманат"тың призеры – Рулә Бармаҡова; етенселәр синыф етәксеһе Ғайса Ишмөхәмәтов менән.**

# ҠЫУАҠАН ЫРЫУЫНЫҢ ШӘРИП АУЫЛЫ БАШҠОРТО ШӘЙЕХ ЗӘЙНУЛЛА ИШАН РӘСҮЛЕВТЫҢ НӘҪЕЛ ШӘЖӘРӘҺЕ








**Ырыуы – ҡыуаҡан**

**Ағасы – ҡарағас**

**Ҡошо – ҡарағош**

**Ораны – салауат**

**Тамғаһы – ♀ (ижау)**




# АУЫЛЫМА ИСЕМ БИРГӘН КҮЛ

Борон замандарҙа был яҡтарҙа үтеп сыҡҡыһыҙ ҡарағай урмандары үҫкән. Бер заман һунарсылар, арып-талып ҡайтып килгәндә, ялға туҡтаған. Тик шырлыҡта усаҡ та яға алмағандар, эсергә һыу ҙа бөткән. Шым ғына ултыра торғас, ҡолаҡтарына сылтыраған тауыш ишетелгән. Шул яҡҡа барһалар, шишмәгә тап булғандар.

Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, һабантуй үткәрер өсөн матур урын эҙләй башлағандар. Был эш һунарсыларға йөкмәтелә. Бик оҙаҡ йөрөгәндән һуң, теге шишмә эргәһенә киткәндәр. Барһалар, шишмә һәм урман урынында йәйрәп яткан таҙа һыулы күл күрәләр. Һунарсылар: “Собхан Алла, Собхан Алла”, – тип күл эргәһенә килгәндәр. Был урындың матурлығына таң ҡалғандар һәм һабантуйҙы ла ошо күл эргәһендә үткәрергә ҡарар иткәндәр. Шул көндән күл буйын үҙҙәренә төйәк итеп һайлағандар. Күлде Собханкүл тип атағандар, тик күл убылып, ҙурайып торғанлыҡтан, ул тора бара Упканкүлгә әйләнгән.



Упканкүл – икенсе төрлө әйткәндә, убылып барлыҡҡа килгән күл. Уның майҙаны – 14,9 гектар, ә тәрәнлеге – 25-30 метр. Тәбиғәттең мотлаҡ һакланырға тейеш комарткыһы тип иғлан ителгән ул. Төрлө балыҡтарға бай булған күлде аҡкоштар ҙа, торналар ҙа, ҡыр ҡаҙҙары һәм өйрәктәре лә, селәндәр ҙә үҙ итә, төйәк итеп һайлай. Күлдең һыуы йомшаҡ,тәмле. Өйҙәрендә крандан һыу ағып торһа ла, әле лә күлдең һыуын халыҡ эсергә, кер йыуырға, мунсаға ала. Кеше тормошо менән бәйле өс туй ҙа күл менән бәйле: бала тыуғас та күл һыуында йыуындыралар; йәш килен дә үҙенең тормош юлын ошонда “һыу юлы”нан башлай; шулай уҡ кешене һуңғы юлға оҙатҡанда ла күл һыуы менән йыуалар, уның тәнен һәм рухын паклайҙар.

Ҡарттар: “Күл һыуы менән битегеҙҙе йыуығыҙ, һыу эсегеҙ – көс керер,”– тип әйтер булған.

Күлдең ике яғында ла мүк һаҙҙары урынлашҡан. Күл һәм һаҙҙар Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән. Атап әйткәндә, һаҙҙа һирәк осрай торған үҫемлектәр: ысыҡ үләне, мүк еләге, ҡылыс үләне һ.б. үҫә.

Ауылдаштарым өсөн күл – оло бер хазина. Балыҡсылар йыл әйләнәһенә балығын тота. Хатта күрше ауылдарҙан да киләләр. Мүклегендә үҫкән мүк еләген, дарыу үләнен йыйып ҡыуаналар. Ҡатын-ҡыҙ эсер һыуға ла күлгә йөрөй. Ауыл кешеләренән бер кем дә төшөп һыу инмәй, күлгә тығып кер сайҡамай. Быны балаҫағалар ҙа аңлап тора, һыу инергә Кәмәлекүлгә, Екәнкүлгә йөрөй. Ауылдаштарым күл тураһында хәстәрлек тә күрәләр. Күлгә яҡын баҫыуҙар һөрөлмәй. Тирәяғына йыл һайын ағас үҫентеләре ултыртыла. Матур итеп ял итеү урындары ла эшләнеп ҡуйылған. Күлдең тирә - яғы ла таҙартылып тора. Яҙғы ташҡындар бөткәс, һәр оста һыу алыр өсөн оҙон баҫма яһап ҡуялар.

Күптәр ташҡын бөтөп, һыу тонғас, күл яғына йыш-йыш ҡарап, унда аҡкоштар төшкәнен көтә, ҡайынлыҡтарында һайраған һандуғас тауыштарын йотлоғоп тыңлай. Йәйен күлдең һыуын эсеп үҫкән, сит ерҙәрҙә йәшәүсе ул һәм ҡыҙҙары, өләсәй-олатайҙарына ҡунаҡҡа килеүсе ейәндәре уны һағынып ҡайта.

Күл буйына төшөп, һыуын эсеп, йылы яҡтарҙа ял иткәндән һуң да бөтмәгән арыуҙарын бөтөрөп, һағыныуҙарын баҫып, кинәнеп ял итәләр. Упканкүлем, барыбыҙҙы ла шулай үҙеңә тартып, һағындырып, саҡырып тор.

**Гөлшат ЙЫҺАНШИНА,**
**Асҡын районының**
**Упканкүл урта мәктәбе уҡыусыһы.**

Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ

# ФРОНТ ҺЫҘЫҒЫНЫҢ КЕСКӘЙҘӘР ЙӨРӘГЕ АША ҮТКӘНЕ

## Иң серле һандыҡ серҙәре һәм оло ағайымдың яуға киткәне

Бәләкәй саҡтан шул хәтерҙә ҡалған. Оҙон урындығыбыҙҙың түрбаш яҡтағы мөйөшөндәге ҙур ғына ҡыҙыл һандыҡ тора. Уның өҫтөндә бер сумаҙан ята торғайны. Гәүһәребеҙ ай-һай тора башлағас, икәүләшеп шуның сыртылдаҡ йоҙағын сыртылдатырға ярата торғайныҡ. Ә эсен асып ҡарарға ярамай. Әсәйем: “Оло ағайың һуғышҡа китте. Был сумаҙан уныҡы. Теймәгеҙ, йәме. Асып, әйберҙәренә тейә күрмәгеҙ. Үҙе нисек һалған, шулай ятһын!” – тигәс, нисек асһың инде. Булмай. Шуға күрә ул беҙҙең өсөн сер һандығы булып тойола ине.

Бибикамал апайым менән Мөхәмәтзәки ағайым ҡул араһына инеп өлгөргән. Шуға ла уларға рөхсәт ине ул сер һандығын асырға. Әле лә хәтеремдә, ағайым унан акварель буяуы алып, һүрәт эшләй торғайны. Шунда ғына күреп ҡалабыҙ. Сер өҫтөнә – сер, тигән кеүек, унда кәлләп-кәлләп һалынған ҡалын-ҡалын дәфтәрҙәр, һүрәт төшөрөлгән альбом, тағы әллә нимәләр ята... Апайым шул серле һандыҡтағы серле дәфтәрҙе алып, әсәйемә уҡып ишеттерә торғайны. Шиғырҙар булған икән ул дәфтәрҙәрҙә. Әсәйемдең Әхтәм тигән ике туған ҡустыһының һуғышта һәләк булыуы хаҡында оҙон ғына бер шиғырҙы ҡат-ҡат уҡый торғайны. Ете генә синыфты тамамлаған оло ағайым уны әллә поэма итеп, әллә бәйет итеп яҙған. Уҡыған һайын, икәүләшеп илап ала торғайнылар...

Бер шиғырын атайым үлгәс яҙған булған. Унан мин шуны белдем. Атайым вафат булғанда, Мөхәмәткилде ағайым әллә ҡайҙа, ер аяғы – ер башындағы Күркәтауҙа (Йылайыр яғы) ағас ҡырҡыуҙа булған. Ағиҙелде Һуғышҡа тиклем үк быуып, гидроэлектр станцияһы төҙөргә ниәтләнгәндәр икән ул. Булһа булғандыр ундай ниәт. Шул турала беҙҙең быуынғаса бер йыр ҙа һаҡланып ҡалған ине.

**Иҙел һыуы, шаулап-гөрләп,**
**Турбина аша үтәсәк;**
**Турбина аша үтәсәк,**
**Энергия бирәсәк.**

Хатта өй һайын йөрөп, кем нисә электр лампаһы элергә теләй, шуның иҫәбен алып та йөрөгәндәр, ти. Ағасты шул төҙөлөш өсөн ҡырҡтырғандар икән.

Сермәндәге педагогия училищеһында уҡып



йөрөгән еренән, асығыуға, йонсоуға түҙмәй, ҡайтып төшкән был үҫмерҙе, кеше етешмәү сәбәпле, колхоз ебәргән инде ағас ҡырҡыуға. Телефон юҡ, почта юҡ. Атайыбыҙ ныҡлап ауырый башлағас, ҡайтарып алыр әмәл булмаған. Ризыҡ артынан ҡайтҡан кеше аша хәбәр барып еткәнсе, атайыбыҙҙы ерләп, өсөнмө, етеһенме уҡытып та өлгөргәндәр.

Оло ағайымдың шиғырынан мин шуны ла белдем. Бына ул ауылға яҡынлаша. Яҡынлашҡан һайын ниҙер һиҙенеп, йөрәге ашҡынып тибә бара. Ауыл ҡапҡаһына етеүгә тәрән ҡарҙы йырып, зыяратҡа һалынған юлдың арғы осонда ҡарайып яңы ҡәбер күренеү менән, йөрәген ҡыҫып, уның янына бара. Яҡын килһә, ни күрә – атай ҡәбере... Саҡ-саҡ йығылып китмәй ағайым. Шунан ул, ҡәбер ташына әйәген терәп, күҙ йәшен түккән. Өйгә ҡайтып инһә – бушлыҡ: ул киткәндә, түшәк тартып, ауырып ҡалған атай ятҡан урын етемһерәп ҡалған. Ә түрҙә бишек эленеп, унда мыш-мыш килеп сабый ята... Бына шуларҙың барыһын да, беҙ бәләкәстәрҙең дә

күҙе еүешләнерлек итеп, теҙеп яҙғанын уҡып, әсәйем менән апайым, һығылып төшөп, тағы иларға тотонор ине. Улар илағас, беҙҙең дә, танауҙарыбыҙ мыш-мыш килә башлай …

Бәхет, халыҡ шағиры әйтмешләй – һүңлап килер ҡунаҡ. Ә ҡайғы ишле булыусан: ул өҫтө-өҫтөнә килеүсән. Атай вафат булған йылдың йәйендә оҙаталар ағайымды фронтҡа. Әсәйем әйтеүенсә, уны оҙатҡанда, халыҡ тау артылып, ауылдан ике саҡырымдан ары ятҡан оло юлға тиклем оҙатҡан. Шул көндө әсәйемдең хәтерләүе иҫемә төшкән һайын, әле лә ҡолағым төбөндә ҡыҙ-ҡырҡындың ер-һыу илағанын, бабайҙарҙың аҙан әйткәнен ишеткәндәй булам. Оҙатылыусыларҙың йыҙарын да тынис ҡына тыңларлыҡ булмаған бит.

**Беҙ һуғышҡа киткән саҡта,**
**Күтәрелде томандар.**
**Донъя хәлен белеп булмай,**
**Хуш булығыҙ, туғандар**
**(Бәхил булың, туғандар)!**

Ағайымды оҙатҡанда, әсәйем иҫһеҙ булып йығыла… Әле генә ирен юғалтыу ҡайғыһы өҫтөнә, ун ете генә йәшендә тапҡан ун етеһе тулыр-тулмаҫ баш балаһы менән хушлашыуы мәңгелеккә бәхилләшеү булып ҡуйыу хәүефе лә иҫен алғандыр инде ғәзизебеҙҙең.

## Өскөл хаттар һәм өмөт

Ул саҡта беҙ радио тигән нәмәне белмәнек тә, күрмәнек тә. Һуғыш хаҡындағы һуңғы хәбәрҙәрҙе халыҡ колхоз идараһында телефон төбөндә ултырған иҫәпселәрҙән һәм аҙнаһына бер йә ике генә килгән гәзиттәрҙән ала ине. Ә инде һуғыш ҡырынан ҡәҙерлеләребеҙ үҙ ҡулы менән яҙған өскөл хат килһә, байрам һымаҡ булыр ине. Шулай булмай һуң, ундай хаттарҙы уҡымаҫ элек үк, уларҙы һалдаттың үҙ ҡулы менән яҙыуынан уҡ уларҙың имен-аман икәненә төшөнөргә була ине бит. Ғәлимйән йә Сабирйән ағайҙан хат алһа, Дәүләтбикә инәйем (әсәйем өсөн ул яҡын ғына еңгәй ҙә, серҙәш тә, әхирәт тә ине), болоттай шәлен бөркәнә һалып беҙгә килер ине. Килер ҙә инер-имәҫтән үк:

– Нурикамал, Мөхәмәтзәки өйҙәме? Хат уҡытайым тигәйнем, – ти һалыр ине. Хәбирҙең инде хәреф таныған Бәхтиәр, Хәфиз тигән ағайҙары булһа ла, шулай итә ине инәйем. Өйҙә, моғайын, уларҙан да уҡыталыр инде ул. Тик йә, былар ҙа белеп торһон әле, типме, әллә ауыл мәктәбен тамамлап, Байназар ете йыллыҡ мәктәбенә йөрөп уҡыған кеше тейешенсә уҡып ишеттерер тип белде микән – улары минең өсөн ҡараңғы ине. Хәйер, был хаҡта уй йөрөтөрлөк йәштә лә түгел инем бит әле мин. Әммә шунығы мине ҡыҙыҡһындыра ине. Хат эсендә фотоһы юҡмы? Миңә лә сәләм әйтелмәгәнме?

Ағайым өйҙә булһа, инәйемдең тауышын ишетеү менән, әсәйем:

Өйҙә-өйҙә. Әйҙә-әйҙә, ин, еңгә! – тип, уны әйҙүкләй. Мөхәмәтзәки ағайым өйҙә булмаһа: “Бар әле тиҙ генә ағайыңды табып әпкил”, – тип, мине йүгертер ҙә, үҙе самауырына тотонор ине. Мөхәмәтзәки ағайым инәлтеп тормай, инәйем алып килгән өскөл хаттағы һәр һүҙҙе, мин дә төшөнөрлөк итеп, асыҡ әйтеп, тауышланып уҡый башлай: “һаумыһығыҙ, донъяла иң ҡәҙерле күргән әсәй, Ғилмисафа ҡарындашым, ҡустыларым – Бәхтиәр, Хәфиз, Хәбир! Йәш йөрәгемдән парланып сыҡҡан ҡайнар (Шуны иҫкәртеп китәйем: хаттың ошо урынында ҡайһы саҡта парланыусы сәләм урынына Урал тауҙарындай сәләм әйтелеүсән) һағынысла сәләмдәремде оҙатып, һеҙҙең һау-сәләмәт йәшәүегеҙҙе теләп ҡалам! Сәләм шулай уҡ күрше-күләнгә, беҙҙе иҫкә алыусыларға. Өй эстәре менән Нурикамал апайымдарға, Мөхәррәм апамдарға айырмай, күп-дин-күп сукдин сук сәләм!” Ошо ергә етеүгә хат уҡыусы ағайым, ғәҙәттә, туҡтап ала. Әсәйем: “Беҙҙе лә онотмаған бит әле ул рәхмәт инде! Үҙенә лә сәләм! Ҡайҙа йөрөһә лә, имен-аман ғына йөрөһөн инде!” – тип, теләк теләргә тотона. Әсәйемә ҡушылып, мин дә ҡыуанам. Шулай итмәй һуң: “Өй эстәре менән Нурикамал апайымдарға” тигәненең эсендә мин дә бар бит! Хат ошо еренә тиклем уҡылыуға инәйем яҙып ябыңған аҡ яулығының осон шәмәргән күҙҙәренә әллә нисә тапҡыр тереп өлгөрә.

Инде күнегеп бөтөлөнгән. Һалдат хатынан артабан һорауҙар ҡойола башлаясаҡ: ”Малтыуар именме? Үҙегеҙ асыҡмайһығыҙмы? Утынбесәнегеҙ бармы?” Тәүге осорҙа шул форсаттан файҙаланып, мин уйға тала торғайным. Миңә шул тынғы бирмәй ине: йөрәктән сәләм нисек парланып сыға икән? Пар тураһында бөтөнләй үк бихәбәрҙәр түгелмен. Ағайым:

Пар машинаһы, пар машинаһы, – тип уҡығанда:

“Пар” тигәнең нимә була ул? – тип бер һорай ҡуйғайным.

Самауыр ҡайнағанда, быу күтәрелә бит әле, хатта соланда ул болот кеүек булып тора. Ана шул була инде пар,– тигәйне.

Аҙаҡ ҡына белдем. Сәләмдең ҡайнар булыуы, йөрәктән парланып сығыуы – уның ысын күңелдән һәм яратып әйтелеүе имеш.

Һорау өҫтөнә – һорау. Минең башты ҡатырған тағы бер нәмә була һалдат хатында. Сәләм унда

Урал тауы менән сағыштырыла бит. Ул тау быναуы беҙҙең һыйыр юлы, Моронташ, Ахун һарайы тауҙары һымаҡ бейек микән, әллә тәпәш кенә микән дә оҙон микән, әллә ҡыҫҡа ғына микән? Ҡайһы тирәлә икән? Беҙҙең тауҙан күренә микән? Бара-тора был һорауҙарға ла яуап алдым ағайымдан. Дөрөҫөн әйткәндә, уның белмәгән нәмәһе юҡ. Һәр хәлдә, минең ауыҙҙан сыҡҡан һәр һорауға уның яуабы әҙер була. Хәйер, шулай булмай һуң. Ул ауылдағы мәктәпте тамалап, таңдан тороп, Байназар мәктәбенә йөрөй бит. Унан шуны белдем. Баҡтиһәң, беҙ Уралдың өҫтөндә йәшәйбеҙ икән. Беҙҙең ауылды уратып алған тауҙар уның итәге генә икән. Шунан инде бар төшөнмәй ҡара. Бәй, фронттағы ағайҙар беҙгә ғәләмәт ҙур сәләм оҙата имеш.

Башта башымды ҡатырған әлеге һорауҙар хаҡында уйлана торғас, һалдат һорауҙарының аҙағын ишетмәй ҡалынила торғайны. Тик һорауҙар бөткәнен аңлатып, ағайым тын ҡалған арала инәйем менән әсәйемдең:

Эй, бала! Ут эсендә йөрөһә лә, беҙҙең хәлде ҡайғыртҡан була бит әле ул!

Йә инде, үҙе хәле үҙенә саҡтыр инде ул…

Хат уҡыу артабан дауам итә һәм инәйем менән әсәйем түҙемһеҙләнеп көткән һүҙҙәр яңғырай башлай: "Үҙемдең хәлгә килгәндә, әлегә имен-һаумын. Ағайымдан хат алыштырып торам. Ул беҙгә яҡын ғына ерҙә һуғышып йөрөй. Атайҙан хәбәр-хәтер алған юҡ. Адресы үҙгәрһә-фәлән, хатҡа яҙып ебәрегеҙ… " Был урында икәүләшеп:

Ай, әттәгенәһе! – тип ҡуя әсәйем менән инәйем.

Командирҙарынан, өсөбөҙҙе бер командаға теркәгеҙсәле, тип һорап бумай микән

Ҡайҙа ул. Булмайҙыр инде. Булһа һуң дауна шулайтырҙар ине лә бер-береһенә күҙ-ҡолаҡ булырҙар ине.

Шулай шул, – ти ҙә инәйем, – ҡуй инде, баланы үҫтер ҙә хөкүмәткә тапшыр, үҫтер ҙә хөкүмәткә тапшыр! – ти ҙә булғаны булған инде, тигән keүек өҫтәп ҡуя. – Икәүһен алғас, етмәгәнме? Аталарын ниңә алырға инде. Оло кешене. Бында тимерлегендә эш ҡырылып ята. Унһыҙ колхоз тереғул булды ла ҡуйҙы лабаһаң, Нурикамал…

Эйе шул, еңгә. Сабыр итергә ҡала инде…

Хат уҡылып бөткәс, һуғыш ҡырында ут-һыу үтеп, ҡан кисеп йөрөгән барлыҡ яугирҙар исеменә, һәләк булғандар рухына бата уҡыла. Был ваҡытта әсәйемдең самауыры борҡолдап ҡайнарға ла өлгөрә. Әсәйемдәр сәйгә ултыра. Шунда әле генә уҡылған хат тәьҫиренән тәьҫирләнгән Дәүләтбикә инәйемдең ауыҙынан өҙәләнеп-өҙәләнеп әйтелгән ике исем яңғырап-яңғырап ҡуя:

Гәлимйәнем! Сабирйәнем!

– Эй, еңгә, еңгә! Ураған һайын: "Гәлимйәнем! Сабирйәнем!" – тиһең дә ҡалаһың, Хәйретдин ағайымды телгә лә алмайһың! – тип ҡуя шелтәләгәндәй итеп. Инәйем, күҙен йәшерергә иткәндәй итеп кенә, аҫҡа ҡарап, йылмая биреп:

Уны уйҙамаған көнөм юҡсы, – тип ҡуя. Олоғая биргәс кенә, төшөндөм буғай быға. Балаларының атаһы, йәнкәй йәнәше хаҡында кеше алдында тауышланып әйтергә тартынған ғына, күңеленән уны бер саҡта ла сығармаған, әлбиттә. Юҡһа, "хәбәрһеҙ ғәйеп булды" тигән ҡара ҡағыҙ алғас та, һаман өмөтөн өҙмәй, көтөр инеме ни Хәйретдин апамды (беҙҙә атай-әсәйҙән өлкән ир затына, боронғо төрки йолаһы буйынса, "апа" тип өндәшәләр). Оҙаҡ көттө инәйем йәнкәй-йәнәшен. Яҙ ҡайтмаһа, көҙ ҡайтыр. Быйыл ҡайтмаһа, киләһе йыл ҡайтыр, тип, үҙ күңелен үҙе оҙайтып көттө лә көттө. Яуҙан имен-аман ҡайтҡан Гәлимйәне менән Сабирйәне олатай булып бөттө… Әсәйем дә, бүтән әхирәттәре лә күптән гүр әйәһе (Ауыр тупраҡтары еңел, гүрҙәре нурлы, йәндәре Йәннәт түрендә булһын! Амин!), беҙҙең урам рәтенән яңғыҙы ҡалған һалдатка булғас та, көттө… Үлеп киткәнсе, иренең ҡайтырына өмөт итте ул… Күрәһең, өмөт уны шулай йәшәткәндер, тим. Ауыр тупрағы еңел, гүре нурлы, йәне Йәннәт түрендә булһын! Амин!

## Дәүләтбикә инәйем юрағандың юш килгәне

Тағы ут эсенә инеп киттеләр микән. Минекеләрҙән хат-хәбәр өҙөлөп тора. Мөхәмәткилденән хат килгән тип ишеткәйнем. Ул нимә тип яҙа?

Бер көндө иртә менән Дәүләтбикә инәйем килеп инде лә, сәләмләшеү менән, шулай ти һалды. Әсәйем түрбаштағы (әҙәби телдә кухня яғы тигәнде беҙ шулай тибеҙ) эшен ҡуйып, ҡулын һөртте лә урындыҡ ситенә терәлде. Терәлде лә:

Улым аяғынан ҡаты яраланған әле ул, еңгә, – тине ауыр уфтанып һәм илап та ебәрҙе. Инәйем уның янына шылып ултырҙы ла, арҡаһынан һыйпап:

Яраланһа ла имен бит әле. Илама. Бәлки ҡайтып та килер әле. Ана Рәхимә еңгәйҙә ул ҡайғы. Зиннуры үлде. Әле Мөхәмәткилде менән Гәлимйәндең йән дуҫы булған Иманмөхәмәте һәләк булған. Яраланһа ни, тере йәндең ямауы үҙендә. Төҙәлер. Күр ҙә тор, бына мин әйтте

тирһең: үҙ аяғы менән ҡайтып төшөр, Алла теләһә. Илама, сабыр бул, – тип, бала йыуатҡандай итеп, әсәйемде йыуатырға тотондо. Уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалһам да, үҙем Мөхәмәткилде ағайымды бөтөнләй хәтерләмәйем. Ҡайҙан хәтерләмәк кәрәк. Уны һуғышҡа оҙатҡанда, өсөм тулып дүртенсе йәште саҡ мөнтәй генә башлаған булғанмын мин. Әсәйем әйтеүенсә, һуғышҡа киткәнендә, оло ағайым мылтыҡ буйы ла булмаған. Ҡайҙан булһын инде, берҙән, малайлыҡтан яңы сығып ҡына килгән сағы булған бит уның. Ике тигәс тә, ул саҡтағы мылтыҡ та батша заманынан ҡалған өлгө буйынса ғына эшләнгән була. Штыгын ҡуйһаң. Ике метрға етә яҙған.

1967 йылда БДУ-ны тамалап, ауылыбыҙ мәктәбендә уҡытҡанымда, һуғыш ветерандары менән клубта осрашыу үткәргәйнем. Һуғышта разведчик булып хеҙмәт итеп, түше тулы орден, миҙалдар менән ҡайтҡан Нәбиуллин Ғәләмбай ағайҙың шунда әйткән бер кәлимә һүҙе хәтерҙә ҡалған. “Мине Мөхәмәткилделәрҙән алдараҡ алғайнылар. Һуғыштың ни икәнен татып, тауар вагонында ялға китеп барһаҡ, ут эсенә йүнәлгән йәп-йәш һалдаттар колоннаһы осраны. Яҡшылап ҡараһам, беҙҙең ауыл малайҙары ла китеп бара. Мөхәмәткилде лә шунда. Мылтыҡ йөкләгән булғандар. Прикладттары ергә һөйрәлә яҙып бара. Үҙем дә һиҙмәҫтән: “Эй, Бөрйән егеттәре! Сәләм!” – тип ҡул болғаным. Тауышымды тегеләр ҙә таный һалып, ҡул болғаған булды. Ниҙер ҡысҡыралар. “Был малайҙарҙың ҡайһыларын ҡабат күреп тә булмаҫ инде”. Башымдан шулай тигән уй үтте лә, күңелем тулды. Эй һәм шулай булып ҡуйҙы”. Шулай тигәйне осрашыуға ордендары янына “Отличник-разведчик” тигән значок тағып килгән Ғәләмбай ағайым. Артабан оло ағайым менән ни булған, был хаҡта уның үҙ ауыҙынан бер генә тапҡыр ишеттем. Ана шул китеп барыуҙан улар төркөмө “Курск дуғаһы”на юлыҡҡан да инде.

Дәүләтбикә инәйем, әүлиә кеүек, күрәҙәлек иткән икән. Юраған юш булды: Мөхәмәткилде ағайым, Аллаға шөкөр, үҙ аяғы менән ҡайтып төштө. Өлкән ағайым 1924 йылғы, йәғни шул үлемесле яуҙан бары өстән бер өлөшө генә имен ҡалған яугирҙар быуынынан ине. Хәҙер инде ауылымда уларҙың береһе лә ҡалманы…

## Беҙ икәү – беренселәр

Яҙ үтте лә, йәй килде. Йәй үтте лә ҡыш килде. Хәбир менән мин ап –аруҡ ҡына йомош-юлға ярай башланыҡ. Ун ике – ун өс йәшлек ағайҙарыбыҙ тотошлай колхоз эшенә егелде. Элек шулай ине бит: һәр ауыл үҙаллы колхоз төҙөгән. Беҙҙең менән уйнап үҫкән, моңло йырсы булараҡ аҙаҡ тотош республикаға даны таралған Ғилман Сәфәрғәлиндең атаһы Зәйнәғәле апа рәйеслек иткән мәлдә беҙҙең “Партизан” колхозы бауырын ҡалҡытып өлгөрә. Шуға ла һуғыш осоронда ул район түрәләрен ашатып тора алған. Шулаймылыр, нисектер. Һәр хәлдә, шул осорҙа колхоз рәйесе булған Мөхәмәтзариф ағай Мөфтәхетдинов мәктәптәге бер осрашыуҙа шулай тигәйне. Колхоз биргән норманы (эшләгән кешегә йән аҫырарлыҡ ҡына бирелгән игенде шулай тип атайҙар ине) ҡалаҡлап ҡына бүлгәндәрен дә, йәйҙәрен бесән сапҡанда, баҡуй буйында осраған бәпкә-балтырған менән генә туҡланғандарын да күргән булды. Әммә “партизандар” асыҡманы. Район үҙәгенән, бүтән ауылдарҙан, тамаҡ аҫырар өсөн, беҙҙең ауылға күсеп килеүселәр байтаҡ булды.

Колхозыбыҙҙың йылҡы өйөрө урамға һыймай үтер ине. Алдан уйнаҡлап килгән тай-тулаҡты күреү менән, беҙ тиҙ генә ҡапҡа эсенә йәшенергә тырыша инек. Екке һәм менге аттар ҙа байтаҡ ине. Әммә уларҙың күп кенә өлөшө, янбаштары йылтылдап, мыйҡылдап торғандарын тотонорға ярамай ине. Ни өсөн тигәндә, уларҙы “РККА аттары”, йәғни һуғыштағы атлы ғәскәребеҙгә оҙатыу өсөн, айырым ашаталар, айырым тәрбиәләйҙәр ине. Шул сәбәптән, яҙғы баҫыу эштәрендә файҙаланыу өсөн, ат етешмәй башлағас, үгеҙ егә башланылар. Уларҙың моронон тишеп, ата-олаталарының төшөнә лә кермәгән михнәттәргә юлыҡтырыу эшен, йәғни һабанға, тырмаға, ҡышын бесән ташыуға егеү эшен, башлау “бәхете” 12 – 13 йәштәрҙәге Мөхәмәтзәки ағайымдар быуынына төштө. Яҙлы, көҙлө генә түгел, тотош йәй буйына улар һабан һөрә ине. Шул арҡала тиңдәштәренең байтағы уҡыуын ташларға мәжбүр булды. Шул иҫәптән ағайым да, алтынсынан уҡыуын тоҙлағайны. Әсәйемдең һүҙен тыңлап, әммә бер йылдан яңынан шул уҡ синыфта уҡып, 1946 йылда етенсене тамамланы. Хәҙер вуз тамамлаусыға ла аптыраусы юҡ. Ә теге саҡта ете синыф тамалаған кеше ҙур белем эйәһе һанала ине.

Тик ағайым артабан уҡырға теләне. Мәктәпте бөткән йылы уҡ Теләс педагогия училищеһында уҡый башланы. Мин иһә шул йылды беренсе синыфҡа барҙым. Шуға Мөхәмәтзәки ағайым: “Икебеҙ ҙә – беренселәр!” – тип мәрәкәләй торғайны. Йылдар үткәс, был һүҙмә-һүҙ аңламалы тура әйтелгән һүҙгә күсмә мәғәнәгә эйә булыуы насип булған икән.

**(Дауамы. Башы 4-се һанда.)**

# “ЕҢЕҮ” ОРДЕНЫ

“Еңеү” – Советтар Союзының иң юғары хәрби ордены. Орден 1943 йылдың 8 ноябрендә СССР Юғары Советы Президиумының Указы менән булдырыла. Был орден менән бер нисә фронт күләмендә ойошторолған уңышлы ғәскәри операциялар өсөн Ҡыҙыл Армияның юғары командалыҡ составы бүләкләнгән.

“Еңеү” ордены менән бүләкләнгәндәрҙең исеме Мәскәүҙә Ҙур Кремль һарайындағы иҫтәлекле таҡташҡа яҙылған.

Орден биш ҡырлы рубин йондоҙ рәүешендә эшләнгән. Йондоҙҙоң ситтәре гәүһәр менән биҙәлгән. Ордендың уртаһында зәңгәр эмаль менән буялған түңәрәктә алтындан Кремль стенаһы, Ленин мавзолейы һәм уртала Спасск башняһы һүрәтләнгән. Һүрәт лавр-имән япраҡтары менән уратып алынған. Аҫҡы өлөштә ҡыҙыл эмаль менән буялған таҫмала “ПОБЕДА” тип яҙылған. Орден платинанан эшләнгән. Уны биҙәкләү өсөн платина, алтын, көмөш, эмаль, биш һалма рубин һәм 174 ваҡ гәүһәр ҡулланылған. Ордендың дөйөм ауырлығы – 78 г. Унда 47 г – платина, 2 г – алтын, 19 г – көмөш ҡулланылған. Һәр бер рубиндың ауырлығы – 5 карат, гәүһәрҙәрҙең дөйөм ауырлығы – 16 карат.






“Еңеү” ордены менән беренсе булып 1944 йылдың 10 апрелендә 1-се Украина фронты командующийы Советтар Союзы Маршалы Жуков Г. К. **(һүрәттә)** бүләкләнә, икенсе тапҡыр был орден уға 1945 йылдың 30 мартында тапшырыла. Бынан тыш был орденға түбәндәге маршалдар лайыҡ була: Генерал штаб начальнигы Василевский А. М. (1944 йыл, 10 апрель; 1945 йыл 19 апрель), Юғары Баш командующий Сталин И. В. (1944 йыл 29 июль, 1945 йыл 26 июнь), 2-се Белоруссия фронты командующийы Рокоссовский К. К. (1945 йыл, 30 март), 1-се Украина фронты командующийы Конев И. С. (1945 йыл, 30 март), 2-се Украина фронты командующийы Малиновский Р. Я. (1945 йыл, 26 апрель), 3-сө Украина фронты командующийы Толбухин Ф. И. (1945 йыл, 26 апрель), Ленинград фронты командующийы Говоров Л. А. (1945 йыл, 31 май), Генерал штаб начальнигы армия генералы Антонов А. И. (1945 йыл, 4 июнь), Алыҫ Көнсығыш фронты командующийы Мерецков К. А. (1945 йыл, 8 сентябрь).

Сит ил граждандарынан был орден менән АҠШ-тың армия генералы Д.Эйзенхауэр (1945 йыл, 5 июнь), Көнбайыш Европалағы союз хәрби көстәренең Юғары Баш командующийы фельмаршал Б.Л. Монтгомери (1945 йыл, 5 июнь), Румыния короле Михай I (1945 йыл, 6 июль), Польша ғәскәренең (СССР-ҙа ойошторолған) Юғары Баш командующийы генерал М. Роля-Жимерский (1945 йыл, 9 август) һәм Югославия азат итеүсе халыҡ армияһының Юғары Баш командующийы Иосиф-Броз Тито (1945 йыл, 9 сентябрь) бүләкләнгән.

1978 йылдың 20 февралендә “Еңеү” ордены менән КПСС Үҙәк Комитетының Генераль секретары, СССР Маршалы Брежнев Л.И. бүләкләнә. Ләкин ул үлгәндән һуң орден кире алына.

## “1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Германияны еңгән өсөн” миҙалы

Был миҙал Бөйөк еңеү көнөндә, йәғни 1945 йылдың 9 майында СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән булдырыла. Уның менән һуғышта ҡатнашҡан һәр кеше бүләкләнгән.

Миҙал латундан эшләнгән. Уның алғы яғында Советтар Союзы Маршалы Сталиндың һыны һүрәтләнгән. Өҫтә – “НАШЕ ДЕЛО ПРАВОЕ”, аҫта – “МЫ ПОБЕДИЛИ”, тигән яҙыуҙар урышлашҡан. Миҙалдың артҡы яғында түңәрәкләп “ЗА ПОБЕДУ НАД ГЕРМАНИЕЙ”, уртала – “В ВЕЛИКОЙ ОТЕЧЕСТВЕННОЙ ВОЙНЕ 1941-1945 гг.”, – тип, яҙылған.







Был миҙал менән яҡынса 14 млн. 933 мең кеше бүләкләнгән.

## “1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында фиҙаҡәр хеҙмәт өсөн” миҙалы




Был миҙал 1945 йылдың 6 июнендә СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән булдырыла. Уның менән Бөйөк Ватан һуғышы осоронда фиҙаҡәр хеҙмәт күрһәткән бөтә эшселәр, сәнәғәт һәм транспорттың инженер-техник персоналы һәм хеҙмәткәрҙәре, колхозсылар, ауыл хужалығы белгестәре, фән, техника, сәнғәт һәм әҙәбиәт әһелдәре, совет, партия, профсоюз һәм башҡа ижтимағи ойошмалар хеҙмәткәрҙәре бүләкләнгән.

Ауылда был миҙал көнлөк эш нормаһын арттырып үтәгән һәм хеҙмәт дисциплинаһын үтәгән колхозсыларға тапшырылған.

Миҙал баҡырҙан эшләнгән. Ул үҙенең хәрби игеҙәгенән таҫмаһы колодкаһындағы, ҡыҙғылт төҫө һәм яғындағы “ЗА ДОБЛЕСТНЫЙ ТРУД” – тигән яҙыуы менән айырыла.




Был миҙал менән яҡынса 16 млн. 96 мең 750 кеше бүләкләнгән.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**“Башҡорт энциклопедияһы” ғилми нәшриәтенең тарих бүлеге мөдире.**

# КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ

Тарихи Башҡортостандың ҙур өлөшөн тәшкил иткән Өфө губернаһы 1917 йылға тиклем алты өйәҙҙән торған: Минзәлә, Бөрө, Бәләбәй Стәрлетамаҡ, Златоуст һәм Өфө. 1897 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Өфө губернаһының 180 волосында 899910 башҡорт йәшәгән.

Был биләмәләрҙе ҡыҙыу колонизациялау башлағас, Өфө губернаһында рус, татар, мишәр, мари, сыуаш, удмурт халҡының нисбәте арта башлай. 1897 йылда Башҡорттар һаны 40,9 процент булып, рустар 37,9 процент тәшкил итә. 8,4 процент тәшкил иткән татарҙар өсөнсө урында тора. 1920 йылда ойошторолған Татар АССР-ына бирелгән Бөгөлмә, Минзәлә, Алабуға, Сарапул өйәҙҙәрендә йәшәгән 200 мең башҡорт йылдам ассимиляцияға, атап әйткәндә, татарлашыуға дусар ителә. Быға совет осоронда алып барылған сәйәсәт тә нык булышлыҡ итә. Мәҫәлән, шул осорҙа мишәр халҡы айырым милләт буларак бөтөнләй юҡҡа сығып, уларҙың барыһы ла татар тип яҙыла.




Тарихсы Әнүәр Әсфәндиәровтың “Минзәлә башҡорттары ауылдары” китабында Ырымбур губернаһының Минзәлә өйәҙендә (1865 йылдан Өфө губернаһына ҡарай) хәҙерге Татарстандың Тукай, Минзәлә, Сарман, Актаныш, Мөслим, Аҙнаҡай, Әлмәт, Бөгөлмә, Лениногорск, Ютаза, Баулы райондарына ҡараған 257 башҡорт ауылы һанап кителә.




1897 йылда алынған халыҡ иҫәбе мәғлүмәттәре буйынса бында 200 меңдән ашыу башҡорт йәшәгән. 1912-13 йылдарҙа алынған йорттар буйлап иҫәп буйынса Минзәлә өйәҙенең 31 волосынан 18-ендә 151 мең башҡорт теркәлгән. Ә 1920 йылда улар “юҡҡа сыҡҡан”.

Был яҡтағы ерле башҡорт халҡы өҙләкһеҙ баш күтәреүҙәр ойоштороп тора. Иң ҙур күтәрелештәр 1662-64 (һары Мәргән, Ишмөхәмәт Дәүләтбаев етәкселегендә), 1681-83 (Сәйет Садир етәкселегендә) йылдарҙа була.

2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса бөгөнгө Татарстанда 14 мең башҡорт иҫәпләнә. Улар ҡалаларға, яңы төҙәлөштәргә күсеп килеүселәр, ә айырым башҡорт ауылдары күрһәтелмәгән.

«Хоҙай үҙе ҡыҙығыр...» Ш. Бабич

# ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙ ҺӘЙКӘЛДӘР



Стәрлетамаҡ районының Айыусы ауылы Салауат ҡалаһының уң яғында, Ашҡаҙар йылғаһы ярында ултыра. Риүәйәттәргә ҡарағанда, был ауылға урман яҡтарынан килеп сыҡҡан һунарсы, Юрматы ырыуы башҡорто нигеҙ һалған. Был ауыл 1812-14 йылғы Ватан һуғышы ҡаһарманы, исеме йырҙарҙа йырланған Ҡаһым түрә Мырҙашевтың тыуған ере булараҡ билдәле. Ҡаһым түрәнең (1778-1813) француздарға ҡаршы яуҙа полк менән командалыҡ итеүе, Владимир ҡалаһында ағыулап үлтерелеүе мәғлүм.

Данлы Ҡаһым түрәнең һәм уның яуҙаштарының иҫтәлеген һынландырыу маҡсатында Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығын билдәләгән ваҡытта был ауылда һәйкәл асылды. Уның янында данлыҡлы “Ашҡаҙар” йырына ла һәйкәл ҡуйылған. Постаментта данлыҡлы йырҙың килеп сығыу тарихы һәм һүҙҙәре яҙылған (һулда).






„АМАНАТ" журналы
ЙОНДОҘЛОҒО
2010


Азамат ТИМЕРОВ









## SsangYong Kyron New

“Северсталь” компанияһының Яр Саллы заводында (был заводта Рәсәйҙең халыҡ автомобиле “Ока” сығарыла ине) етештерелгән был Корея машинаһы джиптар класына ҡарай. Двигателе бензин йә соляркала эшләүе ихтимал. Ҡала эсендә ғәҙәттә арткы тәгәрмәстәре генә тарта, ә бына дүрт тәгәрмәсен дә “егеү” теләһә ниндәй юлһыҙ ерҙәрҙән дә хәүефһеҙ үтергә мөмкинлек бирә.

Был машина үҙенең электроник идара итеү системаларында “Мерседес” фирмаһының ҡаҙаныштарын ҡуллана, шуға унда бик күп уңайлыҡтар табырға мөмкин. Салонының иркен булыуы һәм ултырғыстарының йыйылыуы арткы ишектән һалып ҙур йөктәрҙе ташырға мөмкинлек бирә.

# «Аманат» коллекцияһы




## “БУР” һәм “ВИТА”

Барыһына ла билдәле “Нива” автомобиленең хәрбиләштерелгән варианттары шулай атала. Броня менән көпләнгән “Бур”ҙың өҫтөндәге люк аша бер һалдат пулеметтан да ата ала. Был машинала алты кеше йөрөй. Ҡуйылған маҡсаттарға ҡарап, машинаның төрлө ҡорамалдар менән йыһазландырылыуы ихтимал.

“Вита” варианты яралыларҙы ташыу өсөн санитар машинаһы рәүешендә эшләгән. Яралыларҙы бронетехника эсенән күтәреп сығарыр өсөн махсус краны ла бар. Был техника ябайлығы һәм әрһеҙлеге менән айырылып тора.






# “ХАЛҠЫМ КҮҢЕЛЕ – ХАЗИНА”, – ТИ ЙЫРСЫ

**Башҡортостандың халыҡ артисы Азамат Тимеровты республикала белмәгән, ижадына һоҡланмаған кеше юҡтыр. “Буранбай”, “Эскадрон”, “Сибай” кеүек халыҡ көйҙәре, “Устарыма һал һин йөрәгеңде” (Д.Булгакова һүҙҙәренә Ю.Үҙәнбаев музыкаһы), “Етеле шәм” (Х.Дәүләтов һүҙҙәре һәм көйө), “Атайыма” (З.Ханнанова һүҙҙәренә А.Тимеров көйө) кеүек лирик йырҙарҙы башҡарыуы менән күптән инде халыҡтың күңелен яулаған артисты “Аманат” йондоҙлоғо”на саҡырҙыҡ.**

**– Азамат, әйҙә, һүҙҙе үҙегеҙ менән таныштырыуҙан башлайыҡ.**

– Мин 1969 йылдың 14 февралендә Баймаҡ районының Семеновск ауылында тыуғанмын. Ғаиләлә биш бала үҫтек. Атай-әсәйем икеһе лә йыр-моңға оҫта ине. Беренсе синыфтан төрлө концерттарҙа сығыш яһап, район күләмендә үткән йыр конкурстарында ҡатнашып йөрөнөм. Кесе йәштән тальянда уйнарға өйрәндем, уны миңә күрше Йомағужа бабай бүләк иткәйне. Тора-бара гармунда, аҙаҡ баянда уйнай башланым. Әле лә баянды ҡулдан төшөргәнем юҡ.

**– Бала саҡтан йырсы булырға хыялландығыҙмы?**

Мәктәптә уҡығанда уҡ эстән генә был хаҡта уйланып йөрөһәм дә, сәнғәткә урау юлдар аша килдем. Башта Баймаҡтағы 105-се махсус училищела белем алдым, артабан хәрби хеҙмәттә булдым, унда ла йырҙан айырылманым. Армиянан һуң Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға индем.

**– Сер булмаһа, мәктәптә нисек уҡынығыҙ?**

– Уртаса. Иң яратҡан дәрестәрем йыр, хеҙмәт һәм физкультура булды. Спорт менән шөғөлләндем. Йүгереү, саңғы буйынса бер кемгә лә ал бирмәй торғайным.

**– Азамат, һеҙҙе ниндәй йыр халыҡҡа танытты тип иҫәпләйһегеҙ?**

– “Устарыма һал һин йөрәгеңде”.



**– Һеҙ оҙаҡ йылдар Сибай филармонияһында эшләнегеҙ. Өйрәнелгән, уңыш ҡаҙанған ерегеҙҙе ҡалдырып, ни өсөн Өфөгә килергә булдығыҙ?**

– Сибай филармонияһында эшләү, ижад итеү беҙҙең өсөн ҙур тормош мәктәбе булды. Бында эшләү осоронда күп нәмәгә өйрәндек. Әммә ҡасан да булһа беҙ барыбер Өфөгә күсергә тейеш инек. Баш ҡала баш ҡала инде. Ижад итеү һәм үҙеңде халыҡҡа танытыу өсөн мөмкинлектәр күберәк. Әлбиттә, балаларҙың да киләсәген уйланыҡ.

**– Ғаиләгеҙ хаҡында ла бер нисә һүҙ...**

– Ҡатыным Нәсимә Тимерова – йырсы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы. Икәүләп дуэт итеп башҡарған йырҙарыбыҙ ҙа байтаҡ. Ике бала үҫтерәбеҙ. Өлкән улыбыҙ Урал Фатима Мостафина исемендәге 20-се башҡорт ҡала гимназияһында IX синыфта белем алһа, кинйәбеҙ Арыҫланға – 5 йәш.

**– Йырға һәләттәре һиҙеләме?**

– Урал, 11 йәшендә “Ирәндек моңдары”ында ҡатнашып, 3-сө урын яуланы. Арыҫлан да йырлай. Яңыраҡ беҙҙең менән Һарытау өлкәһенә гастролгә лә барҙы.

**– Халыҡ йырҙары тураһында нимә әйтерһегеҙ?**

Абдулла Солтанов, Сөләймән Абдуллин, Рамаҙан Йәнбәков, Иншар Солтанбаев башҡарған халыҡ йырҙары башҡорт музыка сәнғәтенең алтын фондын тәшкил итә. Телевизорҙан Абдулла Солтановтың “Буранбай”ҙы нисек йырлағанын ишетеп, тетрәнеп тыңлағандан һуң, миндә лә халыҡ йырҙарын ныҡлап өйрәнеү, бар тәрәнлегендә башҡарыу теләге уянды. Башҡорт халыҡ йырҙары бөгөн репертуарымда төп урынды алып тора. Халыҡ күңеле – хазина бит ул, тип, ысынлап та, бик дөрөҫ әйткәндәр.

**– Журнал уҡыусыларына теләктәрегеҙ?**

– Үҙебеҙҙең йыр-моңдарҙы тыңлап үҫһендәр, һау-сәләмәт, бәхетле булһындар.

**Нурия ӘХТӘМОВА әңгәмәләште.**

ТАРТМАЙЫҠ

## 31 май – Бөтә донъяла тәмәкенән баш тартыу көнө

# МОДА БУЛЫП КИЛГӘН ЙОҒОШЛО СИР

**Статистикаға ҡараһаң, донъя буйынса бар халыҡтың өстән бер өлөшө тәмәке тарта, имеш! Ә уйлаһаң, был шөғөлдөң тарихы әллә ни йыраҡҡа ла китмәгән, беренсе сигарет фабрикаһы АҠШ-та 1913 йылда ғына эшләй башлай. Киптерелгән үлән япрағының донъяны шундай тиҙлектә ялмауының сәбәптәре икәү генә: берҙән, тәмәке төтөнөндә булған никотин ҡанға спиртҡа ҡарағанда ла тиҙерәк үтеп инеп, ярһыу тойғоһо тыуҙыра (һурыуҙан һуң 7 секунд үткәс тә) һәм бер нисә тапҡыр көйрәтеүҙән һуң уҡ бәйлелек сиренә юлыктыра; икенсенән, тәмәке тартыуҙың кире һөҙөмтәләре тиҙ генә күренә башламай, шуға кешенең йылдар дауамында тартыуҙың насар яҡтарын шәйләмәүе лә ихтимал.**



Тәмәке тартмаған кешенең үпкәһе (һулда) һәм тәмәкесенең үпкәһе

Шуныһы һөйөнөслө: алдынғыраҡ илдәр тәмәкегә ҡаршы киң фронтлы яу асты. Был тәмәкене һатыу, уны тартыу урындарын ҡәтғи сикләү аша башҡарыла. Шуға үҫешкән илдәрҙә бөгөн тәмәке тартыу яйлап кәмей, ә артта ҡалған илдәрҙә был күренеш арта бара. Статистикаға ярашлы, был йәһәттән “алдынғылыкты” Греция тота: унда һәр кеше йылына өс меңләп сигарет тартып бөтөрә. Рәсәй ҙә унан ҡалышмай, донъяла был күрһәткес буйынса беҙ етенсе урында торабыҙ (илебеҙҙең әллә ни алдынғы булмауы шунан да күренәләр).

Ә тәмәкенең, башҡа насар ғәҙәттәр менән сағыштырғанда, “ҡеүәте” шунан ғибәрәт: ул кешене үҙенә үтә нык бәйләй. Тартырға күнеккән кешене ул ғәҙәт хатта йоҡоһонан да уята, янында тәмәке булмаһа, кешеләрҙән теләнселәргә мәжбүр итә. Тәмәкегә бәйле кешеләр шул сәбәпле унан күреләсәк зыяндарға ла ҡул һелтәп ҡарай, сөнки “әлеге хәлем иртәгә килер сирҙәрҙән хәтәрерәк” тип йәшәй ул.

Көнөнә бер ҡап сигарет тартып йөрөгән кеше ун йылда 60 мең һум аҡсаһын төтөн итеп елгә осора. Матди зыяндан тыш, быноң социаль әҙемтәләре лә етерлек-һеҙҙең менән йәшәгән кешеләр өҙлөкһөҙ төтөн эсендә көн итергә мәжбүр. Ә һеҙҙең өй эсендә зал уртаһына усаҡ яғып йәшәп ҡарағанығыҙ бармы? Ана шул-шул...

Ғәҙәттә, тәмәкегә ылығыу бәләкәй йәштән башлана. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, башта уны модаға эйәреп ҡотороу, шаярыу тип кенә башлайҙар. Аҙаҡтан ташлап булмауын оноталар. Бында әйләнә-тирәләге мөхит тә ҙур урын биләй: атаһы, ағалары, яҡын дуҫтары көйрәткән малайҙар ҙа был шөғөлгә тиҙ өйрәнә. Ә бына ҡыҙҙарҙың тартыуының сәбәбе икенсерәк – улар ғәҙәттә бер-береһенә эйәреп (дөрөҫөрәге, иптәшенән “артта ҡалмаҫҡа” тырышып) ауыҙынан төтөн сығарырға өйрәнә. Улар, үҙҙәренсә, был шөғөлдә үҙҙәрен башҡалар алдында шәп күрһәтеү тип уйлай, әммә бер малай йә егет тә, хатта үҙе тартһа ла, ҡыҙҙарҙың тәмәке тартыуын яратмай. Тик нишләптер тәмәке тартыу ҡыҙҙар араһында тиҙерәк һәм әүҙемерәк тарала: Өфө урамдарында, ер аҫты юлдарында, уҡыу йорттары янында йәштәр араһында тәмәке тартып тороусылар араһында ҡыҙҙар күберәк осрай. Күрәһең, был беҙҙең йәмғиәттә электән ҡабул ителгән күренештең бер ағылыр – егет кешенең тәмәке тартыуы нисектер ғәҙәти хәл тип ҡабул ителә ине, ә бына ҡыҙҙарҙың был шөғөлө тыйыла килде. Бәлки, ҡыҙҙарҙың ҡасып-боҫоп төтөн йоторға өйрәнеүе лә шунан киләлер.

# Һайра-һайра, һары һандуғасым ...





Көйәҙ һандуғас












**Йырсы ҡоштарҙың сағыу образы булып ер йөҙөндәге күпселек халыҡтарҙа танылыу яулаған һандуғасты тауышы буйынса хатта ҡала кешеләре лә таный. Ә бына үҙен күреүселәр бик һирәк. Сөнки ябай һоро турғайҙан бер нимә менән дә айырылмаған был ҡошсоҡ ҡуйы япраҡ араһында үтә йәшеренеп йәшәй, асыҡ урынға бөтөнләй сыҡмай. Беҙҙең яҡтарға ул май урталарында килеп етә, ҡуйы ҡыуаҡлыҡлы һыу буйҙарын төйәк итә. Ата ҡоштар инәләренән иртәрәк ҡайта. Әйткәндәй, һандуғастарҙың тик аталары ғына һайрай.**

Төрлө тарафтарҙа һандуғастарҙың бик күп төрҙәре таралған. Беҙҙә ғәҙәти һары һандуғастан тыш көйәҙ һандуғас (варакушка) ла бар. Уның ҡиәфәте сағыуыраҡ, әммә тауыштары бер үк. Шундай үк һайрар ҡоштарҙан беҙҙә көйәҙ турғай исемлеһе лә бар (щегол). Уныһы инде көйәҙлектә бар ҡоштарҙы ла уҙҙыра, исеме лә шунан.

Һандуғастар ерҙә, ҡыуаҡтар төптәрендәге ҡуйы үлән араһында оя ҡора. Оялары ер менән тигеҙ итеп, соҡорға һала. Унда 4-6 бөртөк көрән төҫтәге йомортҡа була. Сыбар ҡиәфәтле балалары июнь урталарында сыға, улар осорға өйрәнмәҫ элек үк ояһынан сығып китә, үлән араһында йәшеренеп йәшәй. Балаларын ашата башлағас, ата һандуғастың да һайрауы тына.

Төрлө төбәктәрҙәге һандуғастар төрлөсә һайрай. Улар тиҙ арала бер-береһенең һәм башҡа ҡоштарҙың тауыш-өндәрен отоп алып, ҡабатлай башлай, шуға бер тирәләге ҡоштар ғәҙәттә бер төрләрәк һайрай. Шулай ҙа уларҙың барыһына ла хас уртаҡ өндәр бар. Белгестәр һандуғастар һайрауында 12-нән ашыу быуын ишетә, улары бер тәртиптә генә ҡабатланмай.

Борон замандарҙа һандуғастар ситлектә һәр һарайҙа тиерлек аҫыралған. Уларҙың матурыраҡ һәм байыраҡ тауышлыларын сит яҡтарҙан бик ҡиммәткә һатып алғандар һәм килтереп үрсеткәндәр, һайрау буйынса ярыштар ҙа ойошторолған. Ләкин тышҡы ҡиәфәте бик төҫһеҙ булыуы һәм йылына бер ай самаһы ғына һайрауы сәбәпле, уларҙы ситлектә аҫырау ғәҙәте юҡҡа сыҡҡан. Һандуғастарҙы сит илдәрҙән күпләп килтерелә башлаған, төҫкә сағыу ҙа булған, йыл буйына һайрап тороусы кәнәри ҡоштар (канарейка, кенар) алыштырған.

Хәҙер иһә өйөндә ситлектә турғай аҫыраусылар тутыйғоштарға өҫтөнлөк бирә. Быны ла сираттағы мода алышыныу тип ҡабул итергә кәрәктер. Ғөмүмән, ситлектә бик күп төрлө ҡоштарҙы аҫырарға мөмкин, ул мода төрлө ваҡытта төрлөсә булған. Хәҙер өйҙәге һайрар ҡоштарҙы музыкаль ҡорамалдар, заман техникаһы бик уңышлы алыштыра. Шулай ҙа йәмле яҙҙарҙа туғайҙарҙа яңғыраған һандуғас моңон бер музыка ла алыштыра алмай.

# “СӘЛӘМ” ҺҮҘЕН ТАРАТЫҒЫҘ!

**Кешеләр менән күрешкәндә иң тәүҙә сәләм бирәбеҙ. Был ғәҙәткә шул тиклем күнеккәнбеҙ, хатта уның мәғәнәһе хаҡында уйланып та тормайбыҙ. Ә Ислам динендә сәләмләшеүгә ҙур иғтибар бүленә. Уның йолаларын дөрөҫ үтәйбеҙме икән?**

Мөхәммәт бәйғәмбәр: **“Иман килтермәй тороп, һеҙ Йәннәткә инә алмаҫһығыҙ, бер-берегеҙҙе һөйә белмәй тороп, иманлы була алмаҫһығыҙ. Бер-берегеҙгә ҡарата һөйөүгә алып бара торған юлды күрһәтәйемме? Үҙ-ара “Сәләм” һүҙен таратығыҙ!”** – тигән.



“Сәләм” һүҙен таратыуҙың файҙаһы күп. Шуға ла Ислам мосолмандарҙы сәләмдән айырылмаҫҡа өндәп кенә тора. **“Әй, иманлы кешеләр! Сит-ят кешеләр өйөнә ингәндә рөхсәт һорамай, сәләм бирмәй инмәгеҙ. Был үҙегеҙ өсөн хәйерле”**, – тиелә Ҡөрьәндең “Ән-нур” (Яҡтылыҡ) сүрәһенең 27-се аятында. Шул уҡ сүрәнең 61-се аятында былай тиелә: **“Дин ҡәрҙәштәрегеҙҙең өйөнә ингәндә, Аллаһ тарафынан бирелгән мөбәрәк һүҙҙәр менән яҡшы тормош, именлек теләп, бер-берегеҙгә сәләм биреп инегеҙ”. “Ә инде үҙегеҙгә сәләм бирһәләр, һеҙ уларға үҙҙәре биргән сәләмдән яҡшыраҡ, йәки һис тә булмаһа, үҙҙәре кеүек итеп сәләм бирегеҙ.”** (“Ән-ниса” (Ҡатындар) сүрәһе, 86-сы аят.)

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән берәү: “Исламдың яҡшыларҙан да яҡшы сифаты нимәлә?” – тип һораған. **“Исламдың яҡшыларҙан да яҡшыраҡ сифаты – һинең фәҡирҙәргә һый-хөрмәт күрһәтеүең һәм таныштарға ла, таныш булмағандарға ла сәләм биреүең”**, – тип яуаплаған Аллаһ Илсеһе.

Атабыҙ Әҙәмде, ғәләйһис-сәләм, яралтып, бар иткәндән һуң, бер нисә фәрештәгә күрһәтеп, Аллаһ: **“...Бар, уларға сәләм бир һәм фәрештәләрҙең һиңә нисек итеп яуап ҡайтарғандарын тыңлап тор. Фәрештәләрҙең яуабы һинең үҙең өсөн дә, нәҫелең өсөн дә сәләм биреү юлы булып ҡалыр”**, – тигән. Улар эргәһенә барып, Әҙәм, ғәләйһис-сәләм: “Әс-сәләмү-ғәләйкүм”, – тигән. Фәрештәләр уға: “Үә ғәләйкүмүс-сәләмү үә рәхмәтуллаһ! (Аллаһтың рәхмәте булһын!)” – тип яуап ҡайтарған.

Бер ваҡыт берәү Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән өйөнә килеп: “Инергә мөмкинме?” – тип рөхсәт һорай. Мөхәммәт, ғәләйһис-сәләм, үҙенең хеҙмәтсеһенә: “Бар, сыҡ та, был кешегә рөхсәт һорау тәртибен аңлатып бир: “Әс-сәләмү ғәләйкүм! Өйөгөҙгә инергә мөмкинме?” – тип һораһын,” – тип әйтә.

Мөхәммәт, ғәләйһис-сәләм, мосолмандарға ете нәмәне эшләргә бойорған: ауырыуҙың хәлен белеп тороу, мәрхүмдәрҙе һуңғы юлға оҙатыуҙа ҡатнашыу, сөскөргән кешегә: “Йәрхәмүкәллаһ!” (Аллаһ үҙеңде ярлыҡаһын)” – тип изгелек теләү, зәғифтәрҙе яҡлау, йәбер-золом күргәндәрҙе ярҙамыңдан ташламау, “Сәләм” һүҙен таратыу, саҡырғанды ҡабул итеү, ант иткән кешегә биргән антын үтәүҙә ярҙамлашыу.

Осрашҡан ваҡытта мосолмандар, ғәҙәттә, бер-береһе менән ҡул биреп күрешә. **“Ике мосолман ҡул биреп күрешкәндә, ҡулдары бер-береһенән айырылғанға тиклем, уларҙың кескәй гонаһтарының бөтәһе лә ярлыҡалыр,”** – тигән Мөхәммәт бәйғәмбәр.

Имам Хөсәйен әйтеп ҡалдырған һүҙҙәр бик фәһемле: **“Сәләм биреү 70 сауап менән бүләкләнә. Сауаптарҙың 69-ы беренсе булып сәләмде биргән кешегә, береһе – сәләмгә яуап ҡайтарғанға”.**

Күреүегеҙсә, сәләмләшеү – ябай ғына ғәҙәт түгел. Көнөнә әллә нисә ҡапҡыр ҡабатлаған иҫәнләшеү һүҙҙәренең мәғәнәһе лә ҙур. Һәр тәрбиәле кеше быны яҡшы белергә тейеш.

**“Аҙна” гәзитен файҙаланып,**
**А. ҒӘБИҘУЛЛИНА әҙерләне.**

13 йәш. Ҡуҙы. Буш ваҡытта атта йөрөргә яратам. 12 – 14 йәшлек ҡыҙҙар һәм малайҙарҙан хат көтәм.
**Шәрипов Иршат.**
**453814, Хәйбулла районы,**
**Һаҡмар-Наҙарғол ауылы,**
**Дуҫлыҡ урамы, 24.**

* * *

11 йәш. 11 – 13 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат йә смс-хәбәр көтәм.
**Аҫылбаева Сәлимә.**
**453343, Күгәрсен районы,**
**Сарат ауылы,**
**Дуҫлыҡ урамы, 28.**
**Тел.: 89373619202.**

* * *

13 йәш. Һүрәт төшөрөү, шиғыр яҙыу менән мауығам. 12 – 13 йәшлек ҡыҙҙарҙан хат йәки шылтыратыуҙар көтәм.
**Ҡуйбағаров Рәфис.**
**453380, Ейәнсура районы,**
**Мәжит ауылы,**
**Йәштәр урамы, 10.**
**Тел.: 89273462901**
**ICQ: 648456186.**

* * *

12 йәш. Нурания – Үлсәү, Зилиә – Саян. 12 – 14 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтәбеҙ.
**Ишморатова Нурания.**
**453680, Бөрйән районы,**
**Яңы Усман ауылы,**
**Күсимов урамы, 13;**
**Мәжитова Зилиә.**
**Зәки Вәлиди урамы, 16.**
**ICQ: 592967064.**

* * *

12 йәш. Һыуғояр. Бейергә, йырларға яратам, шиғырҙар яҙам, бәйләйем. Йәштәштәремдән хат көтәм.
**Ҡәйепколова Нәркәс.**
**453628, Әбйәлил районы,**
**Буранғол ауылы,**
**Тау урамы, 45.**

* * *

12 йәш. Кәзәмөгөҙ. 11 – 13 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.
**Абдуллина Сәлимә.**
**452563, Мәсетле районы,**
**Әбдрәхим ауылы,**
**Салауат Юлаев урамы, 8.**




12 йәш. Буш ваҡытта бейергә әүәҫбеҙ.
**Гәрәева Айлиә.**
**452265, Илеш районы,**
**Тыпый ауылы,**
**Йәштәр урамы, 28.**
**Латыпова Таңһылыу.**
**Мәктәп урамы, 10.**
**Тел.: 89093527621.**

* * *

“Аманат”ты яратып уҡыйбыҙ. Бигерәк тә “Мәңгелек сер”, “Дуҫ булайыҡ!”, “Көләмәстәр” рубрикалары оҡшай. Тыуған көнөбөҙ: 1996 йылдың 18 ғинуары.
14 – 17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтәбеҙ.
**Вәлиева Рәмзилә һәм Рәзилә.**
**453696, Йылайыр районы,**
**Ҡашҡар ауылы,**
**Йондоҙ урамы, 17.**

* * *

15 йәш. Саян. Бәйләргә һәм бейергә яратам.
14 – 17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хаттар көтәм.
**Ғәйзуллина Дилбәр.**
**452892, Аҫҡын районы,**
**Ҡашҡа ауылы,**
**Үҙәк урам, 48.**

* * *

Таныш булайыҡ: мин – Гөлйөҙөм. 10 йәш. Уҡсы. Китап уҡырға яратам. Йәштәштәрем хат яҙһа ине.
**Рәхмәтуллина Гөлйөҙөм.**
**453654, Баймаҡ районы,**
**Сосновка ауылы,**
**Мәктәп урамы, 10.**

* * *

15 йәш, Буға. Һүрәт төшөрөргә, шиғыр яҙырға, волейбол һәм баскетбол уйнарға, төрлө олимпиадаларҙа ҡатнашырға яратам. Хыялым – киноактриса булыу.
**Кирәева Лилиә.**
**452485, Салауат районы,**
**Мөрсәлим ауылы,**
**Коммунистик урам, 19-23.**

Ай, һылыу!

# Һабанай һылыуы

**Мин, Азалия Килмөхәмәтова, Сибай ҡалаһындағы 9-сы лицейҙың IV “А” синыфында белем алам. Яҡшы уҡыйым, мәктәптә үткәрелгән “Йондоҙҙар фабрикаһы” конкурсында ҡатнашып, 1-се урын яуланым. Бейеү, бәйләү – яратҡан шөғөлдәрем. Биш йәшемдән музыка мәктәбенең бейеү бүлегендә шөғөлләнәм. Киләсәктә бейеүсе йәки сәхнә артисы булырға хыялланам.**





**Ләйсән Садиҡова, Баҡалы районының Иҫке Ҡорос ауылынан:** “Бөтә фәндәрҙән дә яҡшы билдәләргә өлгәшәм, төрлө конкурстарҙа ҡатнашам. Бәйләйем, мәрйен теҙәм, бешеренәм, китаптар уҡырға яратам”.



**Гөлназ Ғатауллина, Дүртөйлө районының Түбәнге Әлкәш ауылынан:** “Йыр-моң, шиғриәткә ғашиҡмын. Район, республика күләмендә үткәрелгән конкурс һәм олимпиадаларҙа йыш ҡына призлы урын яулайым. “Көнгөрә”, “Урыҫ айыуы балаһы” халыҡ-ара бәйгеләрендә лә көс һынағаным бар”.



**Зөлхизә Мәсәлимова, Баймаҡ районының Өмөтбай ауылынан:** “Әшһөйәрмен, өйөбөҙҙә әсәйемә ярҙам итәм, һәр эште урынына еткереп эшләргә тырышам. Буш ваҡытта шиғырҙар яҙам, йыр тыңларға, бейергә яратам”.



**Гөлгөнә Шәйхисламова, Баймаҡ районы Ҡаратал ауылынан:** “Бәләкәйҙән “Аманат” журналын алдырам. Унда сыҡҡан бөтә рубрикалар ҙа оҡшай. Спорт менән дуҫмын. Һәр төрлө ярыштарҙа ҡатнашып, призлы урындар яулайым”.

# Сәскәйҙәрең толом-толом...

**Беҙҙең журналыбыҙҙы уҡыусыларҙан килгән хаттар араһында: “Сәсем ҡойола башланы йәки ул ҡуйы һәм оҙон булып үҫһен өсөн ни эшләргә?” тип һорағандары йыш осрай. “Йәшлек” гәзите хеҙмәткәре, ике метрҙан ашыу оҙонлоктағы сәс йөрөткән Гөлнар апайығыҙ Юлдашбаева биргән кәңәштәр нәфис заттарҙың күңеленә хуш килер, тип ышанабыҙ.**



– Бәләкәйҙән Зәлиә һеңлем менән сәс тәрбиәләүгә яуаплы ҡараныҡ, әсәйем дә оҙон сәс – ҡатын-ҡыҙҙың гүзәллеге, тип үҫтерҙе. Шуға күрә сәс киҫтереп ҡарау бер ҡасан да беҙҙең башҡа инеп сыҡманы, – ти ул. Әлбиттә, оҙон сәсте тәрбиәләү еңел түгел. Башты аҙнаһына ике тапҡыр йыуам, был эшкә ике сәғәт тирәһе ваҡыт бүләм. Улар тиҙерәк кипһен өсөн бер ҡасан да фен ҡулланмайым. Йыуғандан һуң сәсте тәбиғи киптерергә кәрәк, тигән фекерҙәмен. Сөнки фен бөрккән эҫе һауа сәстәрҙең кибеүенә, һыныуына килтерә.

Сәсегеҙҙе тик сифатлы шампунь менән генә йыуығыҙ, шулай уҡ шифалы үләндәр тураһында ла онотоп ебәрмәгеҙ. Мин, мәҫәлән, сәсемде айға бер тапҡыр үлән төнәтмәһе менән сайҡатырға тырышам йәғни сәс өсөн дауалау курсы үткәрәм. Үләндәрҙе ауылға отпускыға ҡайтҡанда һәр саҡ үҙем йыям, бер йылға етерлек запас туплап ҡуям. Үләндәрҙе сиратлаштырып ҡулланырға тырышам, бер йылды тик кесерткән төнәтмәһен генә баш тиреһенә, сәскә һөртһәм, икенсе йылда ромашка йәки ҡомалаҡ төнәтмәһенә өҫтөнлөк биреү яғындамын. Төнәтмәгә бер ҡасан да һыу ҡушмайым.

Шулай уҡ мунсала ҡатыҡ һылап, 20-30 минут тотҡандан һуң, сәсте шампунь менән йыуаһың, аҙаҡ төнәтмә менән сайҡатып ҡуяһың.

Сәстәрҙең ҡуйы һәм оҙон булып үҫеүенә шулай уҡ йылға һыуы ла булышлыҡ итә. Беҙҙең ауылда Һүрәм тигән бик шәп йылға аға. Һыуы шундай йомшаҡ, таҙа. Элек-электән сәсемде ошо йылғаға төшөп йыуырға яратам. Был, үҙ сиратында, сәстең сәләмәтлегенә яҡшы йоғонто яһай.

Гөлнар апайығыҙҙың әйтеүе буйынса, сәс өсөн иң ныҡ файҙалы үҫемлек ул – кесерткән. Уның төнәтмәһе сәсте ярҙам итә, ялтырауыҡ бирә һәм ҡауаҡты бөтөрә.



Ҡауаҡтан ҡотолоу өсөн тағы бер һәйбәт ысул бар, ти Гөлнар. Дүрт йомортҡа һарыһын, ике аш ҡалағы бал, бер аш ҡалағы үҫемлек майын бергә ҡушып бутарға һәм сәскә һөртөргә. Ярты сәғәттән һуң массаны йыуып алырға.

Сәстәрегеҙ матур һәм йылҡылдап торһа, үҙегеҙ генә түгел, башҡалар ҙа һеҙгә һоҡланып ҡарар, юҡҡа ғына беҙҙең әсәй-өләсәйҙәр: “Маңлай сәсең тарап ебәр, күреп йөрәк елкенһен!” – тип йырламаған, тине мөләйем йылмайып Гөлнар.

**Гөлнарҙың һөйләгәнен**
**Н. ФАЗЛЫЕВА тыңлап торҙо.**

# МӨХӘББӘТ ЙӘШКӘ ҠАРАМАЙ

**“Мөхәббәт йәшкә ҡараймы?” (№ 3, 2010) тигән хатты уҡығас, кәңәш бирергә булдым. Мөхәббәт йәшкә ҡарамай. Мин быны үҙемдең атай-әсәйемдән сығып әйтәм. Әсәйем атайымдан өс йәшкә өлкән, шуға ҡарамаҫтан, улар 25 йыл бергә. Беҙҙең ауылда шундай ғаиләләр бик күп, араларында бер-береһенән хатта 8 йәшкә өлкән булғандары ла бар.**

**Гөлназ, мин һиңә уңыштар теләйем, Б. һине аңлар, тип ышанам.**

**ЫНЙЫҠАЙ.**




МӨХӘББӘТ ЙӘШКӘ ҠАРАЙМЫ?

Мөхәббәт... Ошо һүҙҙе ишетеү менән күңелдәрҙе елкендергән, ялҡынлы хис-тойғолар даръяһы күҙ алдына килә. Бер кемдән дә һорап тормай ул. Ҡасан теләй, шунда йөрәк пәрҙәләреңде аса. Уға ҡаршы тороуҙары ай-һай еңелдәрҙән түгел. Мөхәббәт айырым ҡағиҙәләргә лә бойһонмай.

Мөхәббәттә егет кеше ҡыҙҙан өлкәнерәк булырға тейеш тигән ҡанун юҡ, Гөлназ һылыу. Барыһы ла кешенең үҙенән тора: кемдер тиҫтерҙәренән алдараҡ үҫешә, кемдер һуңғараҡ. Бәлки, Б. һинең мөхәббәтеңде ҡабул итергә әҙер ҙә түгелдер. Һеҙҙең араға ата-әсәләре, йәки дуҫтары төшөүе лә мөмкин. Сөнки ҡайһы берәүҙәр ҡыҙҙың егеттән өлкәнерәк булыуына ҡаршы. Әммә ысын күңелдән яратҡан кеше өсөн бер ниндәй ҙә кәртәләр булмаҫҡа тейеш, тип уйлайым.

**ГӨЛСӘСКӘ.**



# ҺӨЙӨҮЕМДЕ ТИҢЛӘП ЙОНДОҘҒА...

Төн... Хыялдарға сумып, йондоҙҙарҙы күҙәтәм. Сағыу ҙа, матур ҙа, серле лә улар. Гүйә, мине яндарына саҡырып, күҙ ҡыҫалар. Ҡанаттарым булһа, осор инем дә һуң яныгыҙға. Йыһанды бер иңләп үтер инем. Тик хәҙер мин күңелем менән генә һеҙҙең янда. Тәҙрәмә нурын ташлап, күктән ергә юл ярып, уйсан ғына айым ҡарай. Мин, хыялый ҡыҙ, уға, әйҙә, үҙ серҙәремде сисәм, ә ул, тыңлағандай, нурын берсә миңә ташлай, берсә болоттарға инеп юғала.

Мин айыма хыялымдағы батырым тураһында һөйләйем дә, ҡапыл йондоҙҙарға ҡарап, “бәлки ошо йондоҙҙар араһында йәшенгәндер минең батырымдың исеме” тигән уйҙарға сумам. Мин беләм, ул минең өсөн иң яҡтыһы булып балҡыясаҡ. Шул йондоҙома “йондоҙҙар батыры” тип исем ҡушасаҡмын. Ә ул төн буйына тәҙрәм төбөндә, емелдәп, балҡып, мине йыуатып торасаҡ. Шул йондоҙҙан алыҫта торған айым да, моңһоуланып, кемделер көтә һымаҡ. Уға ҡараш ташлау менән үҙемде хатта ай һымаҡ күҙ алдыма килтерәм. Мин “ай ҡыҙы” булһам, ул минең өсөн “йондоҙҙар батыры” булып балҡыр, тип хыялланам. Серле хыялдарым алып киләсәк миңә уны. Беҙ осрашҡан мәлдә генә йондоҙҙар беҙҙең өсөн йондоҙ ямғырын яуҙырасаҡ, айым үҙ нурҙарынан осраштырыр күпер яһаясаҡ.

Күк матурлығына һоҡланып, хыяллана-хыяллана йоҡлап киткәнмен. Ә төшөмә иһә хыялымдағы батырым керҙе. “Ай ҡыҙы,тылсымлы аттарым менән килеп, мин һине әкиәт донъяһындай матурлыҡҡа алып барасаҡмын. Тик көт кенә,” – тип наҙлы өндәште...

Әлеге ваҡытта мин бар булған сихри хыялдарымдың, төшөмдөң тормошҡа ашырына ышанып, уны өҙөлөп көтәм әле...

**Айгөл ЮНЫСОВА,**
**“Аманат”тың йәш хәбәрсеһе.**
**Хәйбулла районы,**
**Ғәлиәхмәт ауылы.**




«Шәп малай» конкурсының апрель айының еңеүселәре тип дөрөҫ яуаптарҙы беренсе булып ебәргән **Илеш районының Ишкар ауылынан Илнар Йосоповты, Әбйәлил районының Ишкол ауылынан Салауат Тимерйәновты,** һәм **Силәбе өлкәһе Арғаяш районының Аяҙғол ауылынан Илшат Солтановты** иғлан итәбеҙ. Афарин!

**Дөрөҫ яуаптар (№04-2010)**

1. Джибути
2. Гренада
3. Гвинея-Бисау
4. Микронезия
5. Сент-Винсент һәм Гренадины
6. Сомали
7. Испания
8. Свазиленд
9. Тувалу
10. Йәмән

Ә был флагтарҙың ҡайһы илдәрҙеке икәнен, йә, кем беренсе белер һәм хәбәр итеп өлгөрөр – шул еңеүсе!

Һеҙҙән хаттар һәм телефон аша хәбәрҙәр көтәбеҙ!

СМС-хәбәр ебәрер өсөн кеҫә телефонынан 3443 номерын һәм «Малай» префиксын йыйырға кәрәк.




Префикс: “Малай”

# ИЛ ИЖАДЫ – АҪЫЛТАШ

## Тәүге ҡоймаҡтар




Ауылды сығып, бер аҙ бара биргәс, улар туҡтанылар ҙа, баҫыу ҡапҡаһы янында өймәкләшеп ҡарап ҡалған ата-әсәләренә, дуҫ-иштәренә ҡул болғанылар. Йомшаҡ күңелле Гөлнур ғына тап шул мәлдә күҙҙәренең томанланып киткәнен тоя биргәндәй булды, ә Айнур менән Илнур иһә үҙҙәренең ниһәйәт иреккә сығыуҙарын аңланы. Юлдар күптән өҙөлөп, хәҙер байтаҡ йылдар кеше лә йөрөмәгән тарафтарҙа үҙҙәре өсөн ят та, серле лә, шул уҡ ваҡытта аҙым һайын яңынан-яңы асыштар әҙерләп көткән урман-тау донъяһы ята ине улар алдында. Ни генә тимә, шул яҡтарҙы яйлап ҡыҙырып ҡайтыу ауылдарынан бер уларҙың ғына башына килеп, бөгөн аныҡ сәйәхәт булып бойомға аша әле. Шуға берҙәм килешеү менән юлаусы төркөмдөң башлығы итеп билдәләнгән Айнур карталағы тәүге ял урынын да улар әлегәсә барып етә алған ахыр сиктәге нөктәгә билдәләне – тап шунан алда ятҡан донъя фәҡәт карталағы йүнәлеш булып ҡына ҡалып, һәр нәмә яңы асышҡа әйләнә барасаҡ бит...

Ауылдан ун саҡырымдар самаһында ятҡан Ҡараташ тауында үҫмерҙәрҙең әлегә береһе лә булғаны юҡ. Өлкән класс балалары йыл һайын бер тапҡыр барып ҡайта былай. Ул сәйәхәт хатта тыуған яҡты өйрәнеү буйынса әллә нисә дәрестең программаһына ингән, шикелле. Һәр хәлдә, уларҙы ботаника, география, тарих һәм физкультура уҡытыусылары оҙатып бара. Йыл да ойоштоpолоп торғас, барып тәртәләр өсөн тәғәйен урын да бар унда. Бөгөнгө сәйәхәтселәрҙең ниәте – ана шул лагерға барып етеү. Шунан башланыр...

– Ҡара әле, Башлыҡ, – тип Айнурҙың ауылда йөрөтөлгән ҡушаматын иҫенә лә төшөрҙө, уның был сәйәхәттә башлыҡлығын таныуын да билдәләне булыр Илнурҙың был өндәшеүе. – Сәғәткә ҡарағанда, беҙ байтаҡ ҡына килдек түгелме, күренмәй ҙәһә бер ниндәй ҙә лагерь йораты...

– Аяҡ менән ҡорһаҡ күптән инде ял һәм эш талап итә, – тип уға ҡушылды Гөлнур һәм саҡ беленеп ятҡан һуҡмаҡтың ситенә ауыр биштәрен көс менән ултыртты.

– Сәғәт тигәндән... – Алдан барған Айнур боролдо ла, дуҫтары янына кире килә бирҙе. – Берәйегеҙ ябай сәғәт алманымы?

**(Өмәнең дауамы. Шарты журналдың 4-се һанында донъя күрҙе.)**

Был һорау барыһын да ғәжәпкә ҡалдырҙы. Ысынлап та, уларҙың ябай уклы сәғәтте өйҙәге стенала ғына күргәндәре бар ҙаһа. Айнурҙың атаһы гәҙәте буйынса һаман тағып йөрөй, шикелле. Ә былай, уның телефон эсендә йөрөгәненә барыһы ла күнегеп бөткән. Өйҙә саҡта телефон эшләмәйәсәге тураһында һөйләштеләр, ә бына сәғәт барыбер онотолған икән, һе!.. Бер тәүлектән батарейкалар ултырасаҡ, элемтә лә юҡка сығасаҡ, тимәк, ҡояшҡа ҡарап ҡына йәшәргә ҡала инде балаларға. Ә көн болотлап ебәрһә?..

– Ҡояшҡа һәм ҡорһаҡтағы сәғәткә ҡарап йәшәргә тура килә инде, ҡалайтаһың, – тип был күңелһеҙ уйҙарҙы өҙөргә мәжбүр булды Башлыҡ. – Ҡыҙығыраҡ та булыр. Тик ят ерҙә ҡояштың ҡайҙан һәм ҡасан сығып, ҡайҙа байыуын да самалай белергә кәрәк әле.

– Тағы ла нимәләр онотолдо икән беҙҙең?.. – тип ҡысҡырып уйға ҡалды Гөлнур. – Әллә әйберҙәрҙе барлап ҡарайбыҙмы, малайҙар?

– Ҡырҡ тапҡыр ҡаралған инде. Кәрәге теймәйенсә, барыбер иҫкә төшмәҫ, – тип ҡул һелтәне Илнур. – Башты бутамағыҙ әле һеҙ. Мин бит һеҙҙе сәғәт һорар өсөн туҡтатмағайным. Барып етәбеҙме әле, тигән һорау ҡуйғайным даһа!..

– Хәҙер асыҡлайбыҙ, – Айнур алдына картаны йәйеп һалды, компасын сығарҙы. Барыһы ла районларының интернеттан сығарып алынған картаһына эйелде. – Беҙ ауылдан төньяҡҡа ҡарап сығып киттек. Ҡараташ, бына, бында. Өс сәғәт самаһы атланыҡмы? – Булды уның тағы ла бер уйландырырлыҡ һорауы.

– Атлағанбыҙҙыр… – Илнурҙың яуабы, ай-һай, күберәк түгелме икән, тигән ишараны аңлатты. Ҡорһаҡ сәғәте минуттарҙы һанай белмәй шул, уның үлсәме берәү генә – ашағың килә башлаһа, тимәк, төш еткән. Улайһа, сәйәхәтселәр кәм тигәндә дүрт сәғәт тәпәйләй булып сыға түгелме? Ә ҡайҙа һуң ун саҡырымдағы лагерь? Юҡҡа һорамаған икән шул Илнур.

– Туҡта, Айнур, – тип тағы уйға һалды малайҙарҙы Гөлнур. – Картаңа ҡара әле, Ҡараташ туп-тура төньяҡтамы, әллә саҡ ҡына ситтәрәкме?

– Был карта бит интернеттан сығарып ҡына алынған, унда төньяҡ-көньяҡ күрһәткесе юҡ та, – тип әллә аҡланғандай, әллә шуны ла алдан уйламаған үҙе йүләрҙе әрләгәндәй әйтеп ҡуйҙы Илнур. – Былай, өҫ яҡты төньяҡ тип йөрөтәбеҙ инде.

– Уныһы, Мостай Кәрим яҙғанса, ҡағыҙҙың ҡайһы яғынан ҡарайһың бит! – тип асыулы итеп үкенде лә, тағы бармағын карта буйлап йөрөтә башланы Айнур. – Бына ул, беҙҙең ауыл, ә бына – Ҡараташ. Беҙ ошо яҡҡа атланыҡ. Тимәк, өс сәғәт самаһы атлаһаҡ, унда барып еткән булырға тейешбеҙ. Хәҙер асыҡлайһы ҡалды – эргә-тирәбеҙҙәге ҡайһы түбә Ҡараташ икән?

Был һорау балаларҙы тағы тәрән уйға һалды. Юл буйлап ҡына барып сығырбыҙ, тигәйнеләр ҙә. Урманда юлдар күп булыуын, бер ҡушылып, бер айырылып китеүен элек тә белә инеләр түгелме? Тимәк, улар ҡайһылыр ерҙә икенсе сатҡа боролғандар ҙа, Ҡараташты үтеп киткәндәр буламы? Эргә-тирәндә ҡара урман стеналай булып баҫып торғанда, яҡындағы тауҙар ҙа саҡ төҫмөрләнә әле ул. Унан тағы, күңелле әңгәмәләшеп килгәндә кем иғтибар итһен, бәлки, улар бөтөнләй ситкә лә сығып китмәнеләрме икән?

Ҡараташ тигән сағыу исем менән йөрөтөлһә лә, унда һерәйеп йә берәй ниһе менән күҙгә ташланып торған ҡап-ҡара таш ятмағанын барыһы ла белә. Асылда ул башҡа түбәләрҙән бер ниһе менән дә айырылмай. Әҙерәк ҡаялы, әлбиттә, ләкин янындағылар ҙа шундай уҡ: урманы ла бар, өҫкә ауып килгән ҡаялары ла етерлек, сылтырап аҡҡан шишмәләре лә аҙым һайын. Быныһына ла “Ҡараташ” тигән яҙыу ҡаҙап ҡуймағандар, игеҙәк тауҙар теҙмәһенең һыңары ғына ул түбә.

– Кире боролабыҙмы? – тигән мөғжизәле һорау ташлап, малайҙарҙы картанан айырылырға, үҙенә һынсыл текләргә мәжбүр итте лә Гөлнур, артығын ысҡындырғанын аңлап, төҙәтеү индерә һалды. – Аймылыш киткән юл сатын табырбыҙ, бәлки, тием…

– Тағы ла өс сәғәт тәпәйләргә булһа, мин риза түгел! – тип ҡырт өҙҙө шиктәрҙе Айнур. – Ошонда ял урыны ҡорабыҙ – бер. Шул ваҡытта алға пландар ҡорабыҙ – ике. Булдымы?

Башлыҡтары менән килешмәй сара юҡ ине. Балалар туҡталырға уңайлы урын ҡарай башланы: иң мөһиме, берәй шишмә буйы кәрәк.



**(Дауамы бар.)**

# Велобейеүҙәр





**Триал** – юлда ҡуйылған ҡаршылыҡтарҙы, йәки махсус эшләнгән ҡаршылыҡтар системаһын велосипедта (велотриал), мотоциклда (мототриал) йәки йөк машинаһында (трак-триал) үтеү буйынса спорт төрөнөң дөйөм атамаһы. Бында иң мөһиме трассаны ҙур тиҙлектә үтеү түгел, ә күберәк бихисап ҡаршылыҡтарҙы хатаһыҙ-ниһеҙ ергә йә стенаға бәрелмәйенсә үтеү.

Ул ваҡытта мотокростың иң популяр спорт төрө булыуына ҡарамаҫтан, 60-сы йылдар аҙағында Калифорния штатында (АҠШ) бер төркөм үҫмерҙәр, үҙҙәренең велосипедтарын ҡулайлаштырып, урам буйлап мотокросстағы төрлө трюктарҙы эшләп, ҡаршылыҡтарҙы уҙып, малай-шалайҙы ылыҡтыра башлай. Шулай итеп, әкренләп был ярыштар үҫмерҙәр араһында популярлыҡ яулай һәм 1993 йылдың ғинуарынан Халыҡ-ара велосипедистар союзының ярыш төрҙәренә индерелә. Ә 2008 йылдан ул йәйге Олимпия уйындары программаһына ла индерелә.

Триал менән шөғөлләнеү ул – бер төркөм үҫмерҙәрҙең бергә йыйылып, үҙҙәре отоп алған трюктар серҙәре менән уртаҡлашыу йәки бергәләп төрлө ҡаршылыҡтарҙы үтеүҙән ғибәрәт.

Триал кешенән физик яҡтан махсус әҙерлек талап итә. Триалист күп осраҡта велосипедта ултырмай – булған трюктарҙы торған килеш педалдәргә баҫып башҡара. Был ғәжәйеп спорт төрө менән шөғөлләнеү өсөн сығарылған, велосипедтың ике төрө бар: mod-bike һәм stock-bike. “Модтар” – триал менән шөғөлләнеү өсөн тәгәрмәстәре бәләкәй итеп эшләнгән велосипедтар, ә “стоктарҙы” күбеһенсә осҡа триалистар ҡулында урамдарҙа күрергә була.





## Йүнәлештәре

**Flatland** – велосипедта “бейеү” йүнәлеше;

**Freestyle** – бер нисә велосипедта йөрөү төрҙәрен дөйөмләштереп алған йүнәлеш;

**Vert** – бейеккә осоп, һауала трюктар эшләү;

**Dirt** – бейек-бейек ҡалҡыулыҡтары булған арба юлында ҙур тиҙлектә трюктар эшләү;

**Street** – ҡала урамдарындағы ҡаршылыҡтарҙы уҙыу;

**Bmxracing** – был йүнәлештә ярыштар асфальт түшәлмәгән арба юлдарында үтә. Иң мөһиме – юлды ҙур тиҙлектә үтергә кәрәк. Ярыш 1,5-4 метр бейеклегендәге тау битендә башланып китә һәм юлда дүрт төрлө ҡаршылыҡты үтеү шарт: “өҫтәл” (инглизсә – table), ике ҡатлы трамплин – “дөйә” (инглизсә – double), өс ҡатлы трамплин (инглизсә – triple), “баҫҡыс” (инглизсә – step-up), тулҡындар һ. б.



# Бөрйән районы



**Бөрйән районы – Башҡортостандың иң таулы урыны. Урман-тауҙарҙан тыш, ауыл хужалығына яраҡлы тәбиғи сабынлыҡтар һәм көтөүлектәр майҙаны 9,3 процент ҡына тәшкил итә. Райондың байтаҡ өлөшөн Башҡорт дәүләт һәм “Шүлгәнташ” ҡурсаулыҡтары алып тора. Бөрйәндә 35 ауылда 17,5 мең кеше йәшәй. Район үҙәге – Иҫке Собханғол.**

**Райондың гербы тәбиғи һәм тарихи үҙенсәлектәрен сағылдыра. Был ерҙәрҙе төйәк итеүсе Ҡыпсаҡ, Бөрйән һәм Түңгәүер ырыуҙары башҡорттарының тамғаларынан төҙөлгән композиция йәшел фонда бал менән тулған алтын кәрәҙҙе барлыҡҡа килтерә. Уның уртаһында көрән айыу – башҡорттарҙа изге һаналған януар, баһадирлыҡ, тыныслыҡ һәм изгелек билдәһе. Кәрәҙҙең өс яғынан башҡорт милли орнаменты – ҡусҡарға оҡшатып эшләнгән ағастар был төбәктең урманға байлығын сағылдыра.**



**2006 йылда ҡабул ителгән.**
**Авторы Салауат Ғиләжетдинов.**



# САЛАУАТ ЮЛАЕВ ПОЛКЫ

Икенсе донъя һуғышы XX быуаттта ер шарын ялмаған иң оло афәт булып ҡалды. Был һуғышта 72 дәүләт ҡатнаша, 40 илдең территорияһы һуғыш яландарына әйләнә. Алты йыл эсендә (1939-1945) 65 миллион кеше ҡырыла. Советтар Союзы был һуғышта 26 миллион 600 мең кешеһен юғалта (Германия – 13 миллион 600 мең, Англия – 325 мең, АҠШ – 4-5 мең).

Башҡортостандан фронтҡа 700 мең кеше оҙатыла, шуларҙың 300 меңе әйләнеп ҡайтмай. Республиканың үҙендә бик күп хәрби соединениелар ойоштороla (уҡсылар дивизиялары, кавалерия дивизиялары, миномет һәм артиллерия полктары, танк колонналары, авиатөркөмдәр, бронепоездар һ. б), фронтҡа республика хужалыктарынан 5 меңдән ашыу машина, 71 мең ат оҙатыла.

1942 йылдың 1 июлендә Сталиндың дошман танкыларына ҡаршы тороу бригадалары ойоштороу тураһында бойороғо сыға. Ә 1943 йылдың майында Башҡортостанда Алкино хәрби полигонында 1292-се полк төҙелә. Уға Салауат Юлаев исеме бирелә. Был полктар, ғәҙәттә, дүртәр 76 миллиметр калибрлы пушкалы 5-6 батареянан тора. ЗИС-3 маркаһы аҫтында билдәле был пушка 6 килограмлыҡ снарядты тура наводка менән 820 метр алыҫлыҡҡа ата. Танкыларға, үҙйөрөшлө ҡоролмаларға ла ҡуйылған был орудиелар ышаныслылығы һәм ҡеүәте менән икенсе донъя һуғышының иң яҡшы пушкаһы исемен яулай.



Салауат Юлаев полкы 1-се Украина фронты составында 1943 йылдың декабрендә Житомир янында һуғышҡа инә. Сирҡаныс алыу үтә ҡыйынға төшә, полкҡа ҡаршы немецтарҙың йөҙләгән танкыһына ышыҡланып пехота һөжүм итә. Һуңғы снарядтарына тиклем атып бөтөп, бер нисә тапкыр ҡул һуғышына күтәрелеп, полк дошмандың иллеләп танкыһын юҡ итә.

Ике мең саҡырым фронт юлдарын үтеп, полк еңеүҙе Германияла ҡаршылай. Был арала полк һикһәндән ашыу танк, иллеләп орудие, 25 машинаны юҡ итә, ике меңдән ашыу һалдатты ҡыра. Артиллеристарҙың Одер йылғаһын кисеүҙә күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн 1292-се полк кергән 37-се бригадаға “Одер” исеме бирелә.

* * *

Әйткәндәй, Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районынан II, III дәрәжәле Дан ордендары кавалеры, Советтар Союзы Геройы Алексей Нестерович Калганов (1921-1990) шундай уҡ танкыларға ҡаршы истребитель полкында хеҙмәт итә. Берлин өсөн барған һуғыштарҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.



# СКАНВОРД

Кыҙыл баҫалы рәүешендәге һәйкәл

Шыңар менән киҙәйәлеп ярылған кулақлә әсәр

1

Атолл эсендәге диңгеҙ

Тәрбиә, белем биреү фәне

Ладога йылғаһы

Гварнери ул

Поляктарҙың милли бейеүе

Балакай гена карап

Фанераның бер катлы





Китаптың махсус бите

Кирем-сығымды шымалау приборы

Осоп-саспал торған бөртөк-бөртөк ут

Махсиҙлы бороно халык

Эштен баштарлығы тигеҙлә

2

Парфюмер шыйыкса

Буласак тапшырыусар турыһындағы белдереү

Апайҙың ире

Критик

"Һәтлә кыҙыл сәтеклә кош"

Йыртҡыс йылга балығы

Тиҫбе

Ғилми дауҙама

Рухи кәс

Тел турыһындағы фән

Самолет баҫкысы

Гармундың "ағаһы"

Һырлаған, ағаһы әс кейеме



Дини уҡымышлы ҡатын

Йорт ҡошо

Ромашка

Бесәнсе ҡоралы

Тойғо

3

Троя турыһындағы поэма

Һынау

Шифа

Ябыҡ ат

Йорт ҡошо

Ҡултамға

"Оҙмах емеше"

Һөжүм

Бороно дауҙарҙан һаҡланып ҡалған ҡала

Өйөлөгән һөт

4

Себер болоны

Ҡалтанда — йәйелә ингәлгән баҡсын

Асыл таш

Йәшелсә

Тамыр-таҡа төбөндәге һыуҫтыу таршылары

Йәстек ашаһы

Кеше тамағынан сыҡҡан өн

Һөсәп

Иген келәте

Ямғыр ҡатыш яуған бөҙлө еүеш ҡар

Түҙәп йыйылған ҡапҡасыҙ һауыт



Өфө йәки Бирә

Әҙәплә кунак китер (…ын үҙе белер)

5

Онтау, йомшатыу өсөн тиргә һама тәйә торған йыйылма

Бер үк төрлә нәмәләрҙән торған йыйылма

Оҙон матлы әс кейеме

Бесәй табаны һымаҡ япраҡлы булма гөлө



**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

# КӨЛӘМӘСТӘР

* * *

**– Атай, ә кешеләр ерҙә ҡайҙан барлыҡҡа килгән?**

**– Әҙәм менән Һауанан, улым.**

**– Ә беҙҙең уҡытыусы, кешеләр маймылдан барлыҡҡа килгән, ти...**

**– Ҡайҙан беләйем, бәлки, тәүге маймылдарҙы шулай атағандарҙыр!**

* * *

Мәктәптә ике әхирәт ораша.

– Кисә һинең өсөн Рәмил менән Самат һуғышып китә яҙҙы, – тип хәбәр итә береһе.

– Ысынмы?

– Ысын! Самат әйтә: "Ул минең дуҫ түгел, һиңә булһын!", ә теғеһе: "Миңә лә кәрәге юҡ уның, үҙеңә булһын!" – ти...

* * *

**– Һинең күҙлегең нисәле? – тип һорай бер ҡыҙҙан әхирәте.**

**– Минус биш!**

**– О, улайһа һинең күҙҙәрең гел өшөйҙәр инде!..**

* * *

Күрше бүлмәнән ишетелгән көслө тауыш дәресте алып барырға ҡамасаулай. Уҡытыусы унда керә лә, иң ныҡ ҡысҡырыусыны һөйрәп сығарып, үҙенең янына ултыртып ҡуя һәм дәресен дауам итә. Күршеләр тынып ҡала. Бер аҙҙан ишеккә һаҡ ҡына шаҡыйҙар. Күрше бүлмәнән бер уҡыусы иплә кенә ишекте аса:

– Һеҙ беҙҙең уҡытыусыны ҡайтарып бирмәҫһегеҙме икән?

* * *

**Самат мәктәптән ҡобараһы осоп ҡайтып инә:**

**– Атай, әсәй, һеҙ бөгөн минең көндәлегемде асып ҡарамағыҙ инде...**

**Атаһы ҡайышҡа үрелә, әсәһе йөрәген тота. Көндәлекте асып ҡараһалар, унда – "бишле"! Барыһы ла һуштан яҙалар.**

**– Ана шунан ҡурҡҡайным да инде, – тип ҡуя Самат.**

**Тышлыҡтың 1-се битендә Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты уҡыусыһы Фәнзил Нуриманов һүрәтенең фрагменты.**


АМАНАТ ©

Республика балалар-үҫмерҙәр журналы

Республиканский детско-юношеский журнал

№ 05 (798), Май, 2010

Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһының «Аманат» журналы редакцияһы ҡаҙна предприятиеһы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ.

Учредители: Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала «Аманат» и Управление по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве Республики Башкортостан.

Баш мөхәррире – Сәлмән ЯРМУЛЛИН

Мөхәрририәт:
Артур СУРИН, Салауат СӘҒИТОВ, Артур ИҘЕЛБАЕВ, Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ (яуаплы сәркәтип), Нурия ӘХТӘМОВА (бүлек мөхәррире), Артур ТАПАҠОВ (биҙәлеш мөхәррире).

1929 йылдың мартынан нәшер ителә.
Айына бер тапҡыр башҡорт телендә сыға.
Урта һәм оло йәштәге мәктәп балалары өсөн.
Издается с марта 1929 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.
Для детей среднего и старшего школьного возраста.

Киң коммуникациялар, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау даирәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2007 йылдың 21 декабрендә теркәлде.

Журналды теркәү тураһында таныҡлыҡ ПИ № ФС77-30612

Зарегистрирован Федеральной службой по надзору в сфере массовых коммуникаций, связи и охраны культурного наследия 21 декабря 2007 года.

Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-30612



БЕҘҘЕҢ АДРЕС:
450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2. «Аманат» журналы редакцияһы.
450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала «Аманат».

ТЕЛЕФОНДАР:
баш мөхәррир – 277-73-46; яуаплы сәркәтип – 223-91-83;
бүлектәр – 277-74-80.
e-mail: amanat@yandex.ru
Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru



РЕКВИЗИТТАР:
г. Уфа, ИНН 02 78 02 12 11, КП РБ Редакция журнала "АМАНАТ"
р/с 40602810700000000017, в филиале ОАО "УралСиб",
к/с 30101810600000000770 БИК 048 073 770

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.

Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.

Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».

Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2.



Редакция һеҙҙән килгән хаттарҙы иғтибар менән ҡарай, яҙышып тороуығыҙ өсөн шатлана. Әммә һәр берегеҙгә яуап бирә алмай. Беҙҙең материалдарҙы файҙаланғанда «Аманат» журналына һылтаныу мотлаҡ.



Баҫырға ҡул ҡуйылды 03.05.2010. Ҡағыҙ форматы 84x108 $^{1}/_{16}$ Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 2,25 баҫма табаҡ, 6,05 иҫәп-нәшриәт табағы. Тиражы 16943. Һатыуҙа – хаҡы ирекле. Заказ № 2.0059.10

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арнап, башкаланың Конгресс-холында “Донъяға балалар күҙе менән” тигән күргәҙмә ойошторолдо. Унда Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты уҡыусыларының һүрәттәре, керамика, скульптура, биҙәү-ҡулланма сәнғәте буйынса ижади эштәре урын алды. Бер нисә йәш рәссамдың һүрәтен журнал уҡыусылар иғтибарына ла тәҡдим итәбеҙ. Йәш рәссамдарҙың педагогтары Л. Р. Мәжитова, О. М. Лялина, З. Ә. Ғәлимова, Н. Н. Сөләймәнов, Р. Ф. Сәлихова, В. К. Гапуневичҡа редакция исеменән ҙур рәхмәт белдерәбеҙ.





1


2


3


4


5


6


7


8


9


10


11


12


13

1. **“Яуҙан һуң”.** Фәнзил Нуриманов.
2. **“Яралы һалдат янында”.** Таңһылыу Буранғолова.
3. **“Олатай миҙалдары”.** Илүсә Сәлихова.
4. **“Ямғыр”.** Олеся Павлова.
5. **“Алһыу натюрморт”.** Розалия Хәйруллина.
6. **“Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”.** Гөлназ Исламғолова.
7. **“Тирмәлә”.** Лилә Сабитова.
8. **“Аттар йөҙҙөрәбеҙ”.** Гөлшат Имамбаева.
9. **“Олатайым”.** Гөлназ Солтанморатова.
10. **“Өләсәйем портреты”.** Ләйлә Ҡолмөхәмәтова.
11. **“Ямғыр алдынан”.** Лилиә Әбделмәнова.
12. **“Өләсәйҙең тәмләкәстәре”.** Миңлегөл Амалгилдина.
13. **“Еңеү”.** Айнур Ҡотлозаманов.

Журналдың индексы – 73317

# Беҙҙең вернисаж

## Минең республикам!

Ҡәҙерле дуҫтар! Белеүегеҙсә, 2010 йыл Башҡортостанда Республика йылы тип иғлан ителде. Йыл башынан йәш рәссамдар араһында “Минең республикам!” конкурсын башлағайныҡ.

Ҡылкәләм тирбәтеүселәрҙән конкурсҡа килгән һүрәттәрҙең сираттағы төркөмөн һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ. Һеҙ ҙә ятып ҡалмағыҙ! Әйткәндәй, конкурсҡа йомғаҡ йыл аҙағында яһаласаҡ.


1


2


3


5


6


4


7


8


9

1. **“Бейеүсе”.** З. Сәйетбатталова. Баймаҡ районы, Этҡол ауылы.
2. **“Аҡҡоштар”.** Гөлсинә Ғәббәсова. Асҡын районы, Солтанбәк ауылы.
3. **“Тыуған яҡ”.** Руфина Мөхәмәтҡужина. Әбйәлил районы, Рәхмәт ауылы.
4. **“Ҡоштар – беҙҙең дуҫтар”.** Венера Нурыева. Мәсетле районы, Яуыш ауылы
5. **“Ҡолонсаҡ”.** Нәғимйән Дәүләтбаев. Сибай ҡалаһы.
6. **“Йомороикмәк”** әкиәтенә иллюстрация. Нурзиә Түҙбәкова. Ғафури районы, Һабай ауылы.
7. **“Ҡурайсы”.** Илнур Солтанов. Учалы районы, Ҡотой ауылы.
8. **“Тыуған илем”.** А. Мортазина. Октябрьский ҡалаһы.
9. **“Салауат батыр”.** Гүзәл Ғайсина. Өфө ҡалаһы.